ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискеүфө

17-23 август (урағай) 2019

№33 (867)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

8 сентябрь 2019 БЕРҘӘМ ТАУЫШ БИРЕҮ КӨНӨ

***Кешенең өҫтө уның ауыҙынан сыҡҡан һүҙгә ҡарағанда ла күберәкте һөйләй ала: тел кешенең уйын ғына әйтә, ә өҫ - тәбиғәттең үҙенең уйын сағылдыра.***

***(А. Шопенгауэр).***

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Шүлгәнташты…**

**өйрәнәләр ҙә өйрәнәләр**

3

**Меңйәшәр башҡорттоң**

**мең ырыуынан беҙ**

6-7

**Төрки донъяһында…**

**һаман да унан оло ғалим юҡ**

8

**"Бишут" сәйе**

12-13

**ТВ-программа** 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Башҡортостанда ауыл старосталары тураһында закон ҡабул ителде. Улар ниндәй эштәр башҡарасаҡ?

***Константин ТОЛКАЧЕВ, БР Дәүләт Йыйылышы - Короллтай рәйесе:*** Ауыл старосталары институтының тамырҙары тарих төпкөлөндә ята. Бындай идара итеү тәртибе боронан илдең төрлө халыҡтары араһында йәшәп килгән. Шул уҡ ваҡытта ул беҙҙең Башҡортостан халыҡтары өсөн дә яҡшы таныш. Беҙ старосталарҙы урындарҙағы үҙидаралыҡ органдарының беренсе ярҙамсылары итеп күрәбеҙ. Ауыл ерҙәрендә йәшәгән урындарҙы төҙөкләндереү, йәмғәт тәртибе урынлаштырыу, физик культураны, художестволы ижад һәм халыҡ кәсептәре төрҙәрен үҫтереү кеүек ижтимағи әһәмиәткә эйә мәсьәләләрҙе хәл итеүҙе үҙ иңенә алырға теләгән һәм шуға әҙер булған әүҙем кешеләр бар. Элегерәк әүҙемселәрҙең бындай мәсьәләләрҙе хәл иткәндә вәкәләттәре булмағанлыҡтан, эш барышында һәр төрлө ҡатмарлыҡтар килеп тыуа торған булһа, хәҙер инде ауыл старостаһы статусын закон нигеҙендә нығытып ҡуйыу әлеге проблемаларҙы һәм аңлашылмаусылыҡтарҙы юҡҡа сығарасаҡ. Был закон нигеҙендә шулай уҡ старосталарҙы уҡытыу һәм эшкә өйрәтеү буйынса төрлө саралар уҙғарыу, иң яҡшы старосталарҙы асыҡлау маҡсатында муниципаль һәм республика конкурстары ойоштороу ҙа ҡарала. Старосталарҙың үҙ бурыстарын йәмғәт башланғысында башҡарасаҡтарын, йәғни бының өсөн эш хаҡы түләнмәйәсәген иҫәпкә алғанда, әлеге конкурстар һәм саралар үткәреүҙең старосталар эшен дәртләндереүҙә айырыуса мөһим булыуын билдәләр инем. Староста-сталар ауыл граждандары сходы тәҡдиме буйынса тәғәйенләнәсәк. БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары тарафынан ҡабул ителгән "Башҡортостан Республикаһындағы ауыл тораҡ пункттары старосталары тураһында"ғы был законда шулай уҡ ауыл старостаһы булып эшләргә теләк белдереүсе дәғүәселәргә ҡарата талаптар ҡуйыла, старосталарҙың вәкәләттәре билдәләнә.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

## БЫЛАРЫ…

### һәр ауылға хас

**Бөгөнгө интернет заманында үҙ фекереңде әйтеү, уйҙарыңды еткереү бер ауырлыҡ тыуҙырмай кеүек. Ләкин айырым кешенең түгел, ә дөйөм халыҡты уйға һалған, борсоған һәм күңелен күтәргән ваҡиғалар тураһындағы һүҙҙәрҙе киң йәмәғәтселек, айырыуса власть органдары вәкилдәренә, иғтибарына алып барып еткереү еңел түгел. Шуға күрә гәзиттәге әлеге рубриканың асылыуына ихлас шатландым, сөнки теләге булған һәр кемгә үҙ уй-фекерен еткереү майҙансығы ул. Шәхсән үҙемдең тел осонда торған ҡайһы бер күренештәр тураһында әйтеп үткем килә. Тейешле күҙгә күренер, тип өмөтләнәм.**

Үҙем Бөрйән районы үҙәгендә йәшәһәм дә, район буйлап таралған туғандарға һәм дуҫтарға йыш йөрөйбөҙ. Район үҙәгенән ситтә булған ауылдарҙың үҙ көнитмеше, үҙ яйы һәм булмышы. Шулай ҙа ҙур мегаполистарға йәки ҙур ауылдарға хас булған ҡайһы бер кире күренештәр ҙә уларҙы урап үтмәй. Мәҫәлән, ауыл буйлап йәки яҡынтирә ауылдар араһында эскән килеш машинала йөрөү, автомобиль йөрөтөүгә, таныҡлығы булмағандарҙың һис уйланыуһыҙ руль артына ултырыуы киң таралған күренеш. Йәйен иһә уларға эскән туристарҙың сан борлатып тегеләй-былай урамдар буйлап йөрөүе лә ҡушыла. ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәренең был яҡтарға бик һирәк килеүе ошондай бәлә водителдәргә иркенлек бирәлер, тип уйлайым.

**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

✓ *Староста - ул ауыл хакимиәтенең уң ҡулы, күҙ-ҡолағы булырға тейеш, улар халыҡ менән эште еңелләштерә, тиҙләтә төшә. Тап ана шул старосталар ярҙамында һәм ҡатнашлығында бик күп матур, файҙалы эштәр башҡарыла ла инде.*



ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# БЫЛАРЫ...

## һәр ауылға хас

**(Дауамы. Башы 1-се биттә).**

Ни өсөн, исмаһам, аҙнаһына бер көндә ҡапыл ғына район үҙәгенән ситтә ятҡан ауылдарҙа рейд үткәрмәҫкә? Әлбиттә, хәҙер өҫтә билдәләгәнемсә, мәғлүмәт тиҙ таралыусан, уларҙың ниндәйҙер тарафҡа юлға сығыуын күреп, ватсап буйлап иҫкәртеү хәбәре тиҙ үк барып етә. Шуға күрә иртә таңда йәки ҡара эҙерҙә йөрөү файҙалыраҡ булыр, тием. Ошо хаҡта юл хәүефһеҙлеге өсөн яуаплы орган етәкселеге уйлап, берәй сараһын күрһен ине. Шулай уҡ ата-әсәләргә лә әйтер һүҙем бар. Ни өсөн һеҙ ул-ҡыҙҙарығыҙға төнгө машина асҡысын биреп сығараһығыҙ? Клубҡа йәйәү барып етә алмайҙармы ни? Бәлә-ҡаза көн дә булмай, үҙегеҙҙең балағыҙҙың һәм башҡаларҙың һаулығына һәм ғүмеренә иғтибарлыраҡ булыу, яуаплылыҡ тойғоһон юғалтмауығыҙ хәйерле булыр.

Башҡа төбәктәрҙә нисектер, белмәйем, әммә беҙҙең республика өсөн хас тағы бер күренеш тураһында әйтеп үткем килә. Ул да булһа, күп балалы ғаиләләргә бирелгән ер биләмәһе тураһында. Һүҙ юҡ, йәштәрҙе ҡайғыртыу хуп эш, тик бындай ниәт "ҡул аҫтынан ел үткәреү", йәғни отчет өсөн генә булмаһын ине ул. Мәҫәлән, ҡыҙымдың ғаиләһенә Туймазы районында ер биләмәһе бирҙеләр. Йәштәр ҡыуанып өй күтәрҙе, ләкин йорттарына газ үткәрә алмайҙар. "Урамдың, кәмендә, 75 процентында йорттар төҙөлмәҫтән алда газ үткәреү ҡаралмаған", тиҙәр уларға. Әгәр ҙә ул 75 процентты тулыландырыу тиҫтәләгән йылдарға һуҙылһа, өйөн күтәргәндәргә ни эшләргә?

Һыу тураһында әйтеп тә тораһы түгел. Шәхси йорттарҙы һыу менән тәьмин итеүҙе күптән кешенең үҙ иңенә һалдылар, ҡайһы берәүҙәргә бының өсөн 100 мең һум аҡса түгергә тура килә. Элекке кеүек үҙәкләштерелгән һыу менән тәьмин итеү юҡ кимәлендә. Әйтергә кәрәк, электр утын тоташтырыу ғына бер ҡаршылыҡһыҙ булды балаларға. Ғариза биргәндән һуң бер ай эсендә сымдар һуҙып та ҡуйҙылар.

Электр уты тигәндәй, кире Бөрйәнемә әйләнеп ҡайтайым әле. Йәй буйы беҙҙең районда көндәр буйы электр утының булмауына өйрәнеп тә, яраҡлашып та бөттөк. Ләкин ҡайһы берҙә бер иҫкәртеүһеҙ электрҙы өҙөүҙәре бәкәлгә һуға шул. Ошондай ваҡытта йә эсәр һыуһыҙ ултыраһың, йә һөт айыртып ултырған ерҙә туҡтап ҡалаһың, ҡыйраған телевизор һәм һыуытҡыстар тураһында әйтеп тә тормайым инде. Әлеге лә баяғы шул социаль селтәрҙәр аша иҫкәртеүҙәр ваҡытында яһалып торһа, рәхмәтле булыр инек.

Йәй осоро еләк-емештең мул ваҡыты. Баҡсала үҫкәнен дә, һатып алып ашап та кинәнәбеҙ. Ситтән килеп һатыу итеүселәрҙең тейешле документтары ентекле тикшереләме икән, тигән борсоу бар миндә. Мәҫәлән, ошондай бер һатыусынан медицина кенәгәһен күрһәтеүен һорағас, "һәр берегеҙгә күрһәтеп торорға ваҡытым юҡ", тип яуап бирҙе. Ябай һатып алыусыны һанға һуҡмаһа ла, санэпидемстанция үҙәге хеҙмәткәрҙәренә күрһәтергә бурыслы бит инде ул. Шуға күрә уларға, үҙ сиратында, эштәренә яуаплы ҡарауҙарын һорап инем, ни тиһәң дә, үҙ һаулығыбыҙ - үҙ ҡулыбыҙҙа. Дөрөҫөн әйткәндә, әлегә тиклем бындай тикшереү барышын күргәнем юҡ әле. Яҙмамды тамамлап, барлыҡ гәзит уҡыусыларға ла үҙҙәренең әйтер һүҙен әйтә йөрөүен теләйем. Бергә булғанда, берҙәм булғанда, күп эштәрҙең осона сығырға була.

**Әлиә ВӘЛИШИНА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# Башҡортостанда ауыл старосталары тураһында закон ҡабул ителде. Улар ниндәй эштәр башҡарасаҡ?

**(Дауамы. Башы 1-се биттә).**

***Айрат ӘЙҮПОВ, Баймаҡ районы Йомаш ауыл хакимиәте башлығы:*** Законда ҡабул ителгәнгә тиклем үк тә ауыл старосталары институты ғәмәлдә булды, уларҙы бөтөн ауыл халҡы йыйылып, ышаныс белдергән берәй абруйлы кешене һайлап ҡуялар ине. Беҙҙең ауыл биләмәһендә лә бар ундай йәмәғәтселәр. Йомашта - Зиннур Сирбаев менән беҙҙең хакимиәткә ҡараған икенсе ауыл Юлыҡта Хәмзә Ғәбитов эшләнеләр. Әле уларҙың эш мөҙҙәттәре ахырына яҡынлашты, тип әйтергә була, старосталарҙы ауыл сходы яңынан һайлаясаҡ, тип торабыҙ. Ауыл старосталары хаҡында закон ҡабул ителеүҙең дә тап ошо ваҡытҡа тап килеүе был ваҡиғаның мөһимлеген күрһәтеп тора, тип уйлайым. Бәлки, шул уҡ кешеләргә ышаныс белдерелер тағы ла, әгәр уларҙың теләге булһа инде. Әлбиттә, халыҡ менән эшләүе еңелдән түгел, старосталыҡҡа дәғүә итеүселәрҙең был өлкәлә ниндәйҙер эш тәжрибәһе, ойоштороу һәләте булырға тейеш бит. Унан ауыл халҡы араһында лайыҡлы абруй менән файҙаланған кеше күрһәтелергә тейеш старосталыҡҡа. Дөрөҫөн әйткәндә, ауыл халҡы рәсми власть органы булған хакимиәткә әллә ни юлды тапай һалып та бармай, ә бына ошо хакимиәттең рәсми булмаған вәкилен - үҙҙәре араһынан һайлап ҡуйылған старостаны яҡыныраҡ күреүе, уға нығыраҡ ышаныс белдереүе лә бик ихтимал һәм был йыш ҡына шулай килеп сыға ла. Ысынында иһә староста - ул ауыл хакимиәтенең уң ҡулы, күҙ-ҡолағы булырға тейеш, улар халыҡ менән эште еңелләштерә, тиҙләтә төшә. Тап ана шул старосталар ярҙамында һәм ҡатнашлығында бик күп матур, файҙалы эштәр башҡарыла ла инде. Мәҫәлән, беҙҙең Йомаш, Юлыҡ ауылдарында ҡайһы бер төҙөкләндереү саралары, зыяратты кәртәләү, шәхси баҡсалар кәртәләүҙәрен йүнәтеү, биләмәне сүп-сарҙан таҙартыу кеүек эштәрҙе ойоштороу буйынса өмәләр уҙғарылып тора, байрам саралары үткәреү ҙә старосталар иңендә. Ауылда алып барылған айыҡлыҡ өсөн көрәштең дә алғы сафында улар йөрөй. Был эштәр бик күп ваҡыт һәм көс талап итә. Староста статусы уларҙың үҙҙәренә бер ниндәй ҙә шәхси файҙа бирмәй, уларға был эштәре өсөн бер тин дә түләнмәй, ә шулай ҙа тыуып-үҫкән тыуған еренең ысын илһөйәрҙәре булараҡ, старосталар тыуған ауылыбыҙ тағы ла матурыраҡ, таҙараҡ һәм төҙөгөрәк булһын, тип тырыша. Быныҡ менән шуны әйтергә теләйем: законда старосталар алып барған ғәйәт мөһим ижтимағи-ойоштороу саралары, ауыл халҡын әүҙем һәм сәләмәт тормош рәүешенә йәлеп итеү өсөн тырышлыҡтары, уларҙы берҙәм граждандар йәмғиәте итеп ойоштороу буйынса эшмәкәрлектәре өсөн аҙмы-күпме түләү ҡаралмауы бик йәл, әлбиттә.

***Мәликә ТӨХФӘТУЛЛИНА, хеҙмәт ветераны, пенсиялағы уҡытыусы:*** Ғүмеремде мәғариф эшенә бағышланым. Хаҡлы ялда булһам да, ҡул ҡаушырып ултырырға ваҡыт юҡ: ауылдаштарым мине староста итеп һайлап ҡуйҙы. Ауылда йәшәгәс, мал да аҫрайһың, баҡса ла үҫтерәһең. Тынғыһыҙ эштә саҡта йәмәғәт эштәренә лә өлгөргәнде уйлап, әле лә бирешмәм, моғайын, тип уйлап ризалашҡайным, мин күҙаллағансараҡ булмай сыҡты ҡайһы бер хәлдәр. Матур, сәләмәт тормош менән йәшәгән, тәртипле балалар тәрбиәләгән ғаиләләр менән бер ауырлыҡ та юҡ. Үкенескә, үҙҙәренсә генә уйлап, башҡаларҙы һанламаған кешеләр ҙә бар ауылда. Айырыуса ғаилә башлыҡтары эскелеккә бирелеп, шул арҡала ауыр хәлдә йәшәгән балалар яҙмышы борсой мине. Тәү ҡарашҡа бында старостаның ҡыҫылышы юҡ һымаҡ, ләкин социаль хәүеф сығанағы булараҡ, бындай хәлдәргә битараф ҡалыуы ла ҡыйын. Яңы ҡабул ителгән закондағы, старосталар опека һәм попечителлек органдарына булышлыҡ итергә тейеш, тигән һүҙҙәрҙе шуға ла күңелем ҡабул итә алмай. Эскеселәрҙе ата-әсә хоҡуғынан мәхрүм итеү процедураһы ла бик ҡатмарлы. Унан һуң, иҫ белеп, ҙурайған балаларҙың да күбеһе ата-әсәһен, улар ниндәй генә эскесе булмаһын, ташлап киткеләре килмәй. Дөрөҫ, уларҙы ата-әсәһенән айырып алып китеү менән генә хәлде ҡотҡарып булмаясағы билдәле, өҫтәүенә, был бала күңеленә ауыр яра һалasаҡ һәм шуның һөҙөмтәһе булараҡ, бындай ғаиләнең тағы ла ҙурыраҡ бәләгә тарыуы ихтимал. Ҡыҫҡаһы, ауылдарҙа айыҡлыҡ өсөн дә, эскелеккә ҡаршы ла бер кимәлдә көрәш алып барылырға тейеш, тип уйлайым. Эскесене айыҡтырып булмай , тип уларға ҡул һелтәп ҡарау - кешелекһеҙлек. Ауыл хакимиәттәре бындай әҙәмдәр менән дә эшләргә тейеш. Мәҫәлән, уларҙы әленән-әле дауаланыуға ебәреп торорға була. Уларҙы ла дауаламағас, район үҙәктәрендәге наркология стационарҙары эшһеҙ ултырырға тейешме ни? Бына ошо йәһәттән, староста булараҡ, мин үҙем ауыл советтарына ҡуш ҡуллап ярҙам итергә әҙермен. Бында, бәлки, минең уҡытыусылыҡ "ҡаны" алдан йөрөйҙөр, тик барыбер староста - ул иң тәүҙә тәрбиәсе булырға тейеш, тигән фекерҙә торам. Өмәләр ойоштороу, ауылдарҙы тәртиптә тотоу, зыяратты ҡарап, төҙөкләндереп тороу, байрамдар үткәрешеү ҙә кәрәк - изге һәм яҡшы ғәмәлдәр, уларҙы бергәләшеп атҡарыуы ҡыйын эш тә түгел. Ә шулай ҙа бөгөн беҙгә ауылдарыбыҙҙың рухи сәләмәтлеге өсөн күберәк эшләргә кәрәк. Элек халыҡты коммунистик идеология ярҙамында тәрбиәләргә тырыштылар, ә бөгөн беҙҙең алда икенсе бурыстар - милли идеяларыбыҙҙы бойомға ашыра барыу: халҡыбыҙ үҙ ерендә үҙе хужалыҡ итеп йәшәһен, тарихын, телен онотмаһын, сәләмәт ғаиләлә сәләмәт, һәләтле балалар үҫтерһен, тип тырышырға тейешбеҙ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда йәшәүселәргә торлаҡҡа газ үткәреү өсөн сертификаттар тапшыралар. Тейешле указға республика етәксеһе Радий Хәбиров ҡул ҡуйған. Сертификаттар Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларҙың, һуғыш һәм хәрби хәрәкәт инвалидтарының, инвалидтарҙың һәм инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләрҙең, шулай уҡ ишле ғаиләләрҙең өйҙәренә газ үткәреү сығымдарын өлөшләтә ҡаплау өсөн бирелә. Указ 9 августа көсөнә инде.

✓"Торатау" конгресс-холында сағыу, заманса һәм һәләтле идарасылар табыу өсөн республика Башлығы Хакимиәте башланғысы менән үткәрелгән "Башҡортостан лидерҙары" кадрҙар проектының "Идара итеү командаһы 2020-2025" конкурсы финалсыларын билдәләнеләр. Ойоштороусылар хәбәр итеүенсә, 195 кеше ярымфиналға сыҡҡан. Конкурстың төп бүләге - дәүләт структураларында етәкселек эше тураһында тәҡдим, уны 50 ҡатнашыусы алырға тейеш.

✓Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбировтың Архангел районына эш сәфәре Березовка ауылында "Сабитов" крәҫтиән-фермер хужалығының эшмәкәрлеге менән танышыуҙан башланды. Хужалыҡтың фермаһында 380 баш эре мал бар. Крәҫтиән-фермер хужалығына ҡараған 320 гектар ерҙә - иген культуралары, 150 гектарында күп йыллыҡ үлән сәселгән. Радий Хәбиров продукцияның ҡайҙа һатылыуы, үҙенең сауҙа маркаһы булыу-булмауы менән ҡыҙыҡһынды.

✓Башҡортостан етәксеһе Радий Хәбиров бойороғо менән Әбйәлил, Баймаҡ, Йылайыр, Көйөргәҙе, Стәрлебаш һәм Хәйбулла райондарында майиюль айҙарында иҫкән ҡыуан ел һәм тупраҡтың ҡоро булыуы һөҙөмтәһендә сәсеүлектәрҙең һәләк булыуы сәбәпле ғәҙәттән тыш хәл режимы индерелгән. Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығына ауыл хужалығы культуралары һәләк булыуға бәйле сығымдарҙы ҡаплау өсөн материалдар әҙерләү һәм уларҙы Рәсәй Ауыл хужалығы министрлығына тапшырыу бурысы йөкмәтелгән.

✓Башҡортостанда, республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, ағымдағы йылдың тәүге алты айында халыҡ үлеменең кәмеүе күҙәтелә. Йыл башынан был күрһәткес республикала 12,2 промилле тәшкил иткән, ул былтырғынан 0,2-гә аҙыраҡ. Йәғни, беренсе ярты йыллыҡта республикала бөтәһе 24 380 кеше үлгән.

✓ *Башҡорттарҙа Шүлгәнташ буйынса бик күп һәм төрлө тармаҡтарҙағы тикшеренеүҙәр булыуына ҡарамаҫтан, был сығанаҡтарҙы тиҙҙән урыҫ ғалимдарының тикшеренеүҙәре күләгәлә ҡалдырыуы ихтимал.*



ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

**Башҡортостан тәбиғәт ҡомартҡыларына, тәбиғәт мөғжизәләренә бик бай һәм һуңғы йылдарҙа әүҙем ялды үҙ итеүселәр, йылдың ниндәй миҙгеле булыуына ҡарамаҫтан, иҫтәлекле урындарға ашыға. Бәлки, бер күреүҙән ғашиҡ булдым, тигән һүҙҙәр тап ошо бай һәм үҙенсәлекле тәбиғәтебеҙгә лә ҡағылалыр, сөнки бер тапҡыр күргән, бер тапҡыр булған урындар һине ҡабат-ҡабат үҙенә саҡырып тора, төштәргә инеп йөҙәтә. Шундай тәбиғәт менән берлегеңдә нығытыусы урын - ул, әлбиттә, Бөрйән районындағы Шүлгәнташ мәмерйәһе. Әммә был юлы ял итергә түгел, ә мәмерйә урынлашҡан биләмәләге хәлдәргә байҡау яһау маҡсаты менән юлға сыҡтыҡ.**

# ШҮЛГӘНТАШТЫ...

## өйрәнәләр ҙә өйрәнәләр

Бында иң элек күҙгә ташланғаны - Мәндәғол менән Ғәҙелгәрәй араһындағы участканың бер өлөшөндә асфальт һалына башлауы һәм ҡурсаулыҡ эргәһендәге территорияла инфраструктураның үҫеше: заманса уңайлыҡтары булған йорттар, ял итеү территориялары булдырылыуы. Урындағы халыҡ яйлап кафелар ҙа аса башлаған. Шулай уҡ "Урал батыр" эпосының сәсмә вариантынан өҙөктәр ҡуйылыуы ла туристарҙың белемен арттырыуға бер аҙым булып тора, сөнки бында халҡыбыҙҙың ижади мираҫы өлгөһө булған әҫәр менән таныш булған Башҡортостан халҡы ғына түгел, Рәсәйҙең төрлө мөйөштәренән килә. Кем әйтмешләй, процесс башланған. Әммә туризм алға киткән илдәр менән сағыштырғанда, өйрәнәһе, эшләйһе эштәр күп әле.

Ҡасандыр мәмерйәнең барлыҡ залдарына ла инергә мөмкин булһа, хәҙер уның ауыҙынан ғына урап сығаһың. Ҡыҫҡа ғына ошо ваҡытта гидтар экскурсия үткәрә. Әйтергә кәрәк, экскурсия күңелдә ниндәйҙер аңлашылмаған тойғо ҡалдырҙы, гүйә, гидтар ниндәйҙер ятлап алған һәм алдан әҙерләнгән тексты ғына һөйләй, ә өҫтәмә һорауҙарҙы урап үтергә тырыша. Мәҫәлән, бер урында "мөгөҙө ике яҡҡа тарбайған ҡуй" менән "сыҫҡан" һүрәтен көслəп аңға һеңдерергә тырышалар, әммә ни өсөндөр минә ундағы һүрәттәр "Урал батыр" эпосы персонаждары булараҡ күҙ алдына баҫа. Тарбай мөгөҙлө ҡуй урынында ауыҙын асып ниндәйҙер тауыш сығарып торған өлпөлө ҡош профиле асыҡ күренә. Эйе, кемдең фантазияһы нимәгә етә, әммә минең хыял һаман да эпос тирәләй өйөрөлә. Ни өсөндөр экскурсовод мәмерйә ҡаяһында һуңғы табылған дөйә рәсеме тураһында иҫкә алманы, хатта был хаҡта һорау биргәс, "мин дөйәне күрмәнем", тип тиҙ генә яуаплап, икенсе темаға күсергә ашыҡты. Шулай уҡ Шүлгәнташ мәмерйәһенең ЮНЕСКО-ның мәҙәни мираҫ объекттары исемлегенә инергә дәғүә итеүе тураһында ла бер ауыҙ һүҙ булманы. Ә бит был бөгөн Башҡортостан өсөн генә түгел, Рәсәй өсөн дә өмөтләнеп көтөлгән ваҡиға, сөнки палеолит осорондағы һүрәттәр күплəп тупланған бындай ҙур мәмерйә илдә башҡа юҡ! Күрәһең, туризм өлкәһендә лә беҙ булғанды күрһәтә, матур тышлыҡҡа төрөп, туристар өсөн етерлек мәғлүмәт бирә белмәйбеҙ.

Икенсе пост, йәғни мәмерйәгә инеү урыны эргәһендә ямғырҙан һуң ҡалҡҡан бәшмәктәргә оҡшап, ялан кәртәле бер майҙанды тултырып ҡоролған палаткаларҙы күреп, тәүҙә аптырап ҡалдым, сөнки туристарға бында инеп урынлашырға ярамай. Төпсөнә торғас, М. Ломоносов исемендәге Мәскәү дәүләт университетының археология кафедраһы доценты, тарих фәндәре докторы Житенев Владислав Сергеевич етәкселегендәге археологик экспедицияның лагеры икәнен асыҡланым һәм ҡыҙыҡһыныуымды еңә алмай, бер нисә һорау менән мөрәжәғәт итергә булдым. Бәхеткә күрә студенттарҙың ял - мунса көнө булып сыҡты, шуға улар ял итәләр ине, әммә шуныһы үкенес: уларҙың нисек эшләгәнен күреү бәхете эләкмәне. Хәйер, күреү мөмкинлеге лә бик икеле, сөнки эштәр бикле залдарҙа һәм махсус рөхсәт буйынса ғына башҡарыла икән. Владислав Сергеевич 2009 йылдан алып Көньяҡ Уралдың мәмерйәләрен, шул иҫәптән Ямаҙыташ (шулай уҡ Игнат, Игнатов, Игнатиевская, Дальняя, Серпиевская атамалары менән билдәле) һәм Шүлгәнташ мәмерйәләрен тикшереү менән шөғөлләнә. Докторлыҡ диссертацияһын да Шүлгәнташ мәмерйәһе буйынса яҙа. Был хаҡта ул үҙе: "Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендәге мәмерйәләр тикшерелгән, улар яҡшы билдәле, әммә Көньяҡ Урал мәмерйәләре ентекләп тикшерелмәгән. Икенсе яҡтан, тап уларҙа таштарҙа палеолит осоро һүрәттәре һаҡланып ҡалған. Ошо бушлыҡты тултырыу маҡсатында бындағы мәмерйәләрҙе өйрәнеү менән шөғөлләнә башланым", - ти.

Быйыл археологик экспедицияға төрлө курстарҙан 31 кеше килгән. Башҡортостандан барҙы армы, тип һорайым. "Быға тиклем ике кеше бар ине, быйылғы составта юҡ, - ти Владислав Сергеевич, - әммә Магнитогорскиҙан берәү бар". Ирекһеҙҙән һорау тыуа: Башҡортостанға маҡсатлы рәүештә археология буйынса ла белгестәрҙе әҙерләргә кәрәкмәйме икән ни? Сөнки Рәсәй ҡалаларынан килгән егет-ҡыҙҙар ҡаҙыныу эштәре алып бара, боронғолоҡ серҙәренә төшөнөргә тырыша, ә ҡайҙа беҙҙең кадрҙар, ни тиһәң дә, Шүлгәнташ федераль тәбиғәт ҡурсаулығы территорияһында урынлашыуға ҡарамаҫтан, тәү сиратта, ул беҙҙең башҡорт ҡомартҡыһы бит! Ә беҙ уны сит-ял ҡулдарға тапшырып, тыныс ҡына ултырабыҙ.

- Шүлгәнташ мәмерйәһе башҡорт халҡының мәшһүр "Урал батыр" эпосына бәйле. Ә һеҙ үҙегеҙ, студенттарығыҙ, эпос менән танышмы? Ни тиһәң дә, эпосты аңламай тороп, мәмерйә серҙәрен аңлауы еңел булмаясаҡ, һәр хәлдә, уның аңлатмаһы бөтөнләй икенсе юҫыҡта китеүе мөмкин... - тип һөйләшеүҙе башҡортлоҡҡа бороро тырышам.

- Мин үҙем "Урал батыр" эпосын уҡыным, әммә студенттар барыһы ла уҡығандыр, уның йөкмәткеһе менән таныштыр тип әйтә алмайым. Ләкин беҙ шәп идея бирҙегеҙ - киләһе экспедицияларға сығыр алдынан уларға эпосты уҡырға, уның менән танышырға ҡушырға кәрәк! - ти Владислав Житенев.

Әңгәмә барышында асыҡланыуынса, экспедиция бында ике аҙнаға килгән. "Эште нисек ойоштораһығыҙ, студенттар төркөмләп эшләйме, әллә барыһы бергә инәме мәмерйәгә?" - тип тел осонда торған һорауҙы бирмәй түҙмәйем, сөнки уның залдарын бит юҡҡа япманылар - ҡояш нурҙарының һәм туристарҙың күплеге мәмерйә эсендәге температураны үҙгәртеп, ундағы рәсемдәр юҡҡа сығыу ихтималлығы янай ине.

- Элек килә лә эшкә тотона инек, быйыл тәүҙә лекциялар үткәрҙек, һуңынан уларҙы практика менән нығытыу өсөн мәмерйә эсендә эшләнек. Лекция менән ғәмәлдәге эшмәкәрлек араһында ҙур айырма ята - студенттар шуны үҙҙәре лә тойҙо. Мәмерйә залдарына ике студент һәм бер ҡурсаулыҡ хеҙмәткәре генә инә һәм улар 45 минуттан да артыҡ эшләмәй, сөнки талаптар шулай. Һәм төркөмдәр алышынып тора...

- Владислав Сергеевич, һеҙ инде 10 йылдан ашыу Шүлгәнташты тикшерәһегеҙ, ошо арауыҡҡа ниндәйҙер йомғаҡ яһап, ниндәй табыштарығыҙҙы, ҡаҙаныштарығыҙҙы билдәләр инегеҙ? - өмөт менән, башҡорт тарихына инерлек яңылыҡ көтәм.

- Әлегә бер ниндәй ҙә ҡаҙаныштарыбыҙ юҡ, әммә киләсәктә булыр тип өмөтләнәбеҙ, - ти әңгәмәсем. Ҡыҫҡаһы, Мәскәү һынлы Мәскәүҙән килгән ғалимдан гәзит уҡыусыларыбыҙҙың мәғлүмәти таныҡлығын ҡандырыр һүҙҙе тартып алып булманы...

Бөгөн Шүлгәнташ мәмерйәһе ике хужаның милке булып тора. Бер яҡтан, ул РФ Тәбиғәт ресурстары һәм экология, РФ Мәҙәниәт министрлыҡтарына буйһонһа, йәғни федераль милек булһа, икенсе яҡтан, ул Башҡортостандың мәҙәни ҡомартҡыһы. Был Рәсәй гербындағы ике башлы сәмреғошҡа оҡшап китә - бер башы федералдарҙың бойороғон тыңлаһа, федераль ҡануниәткә буйһонһа, икенсе башы башҡорт халҡы һәм Башҡортостан мәнфәғәтенә эшләргә тырыша, урындағы закондарға буйһона, әммә федералдарҙы уҙып китә алмай. Ләкин бер ҡаҙанға ике тәкә башы бер ваҡытта ла һыймай. Ошо сәфәр ваҡытында күҙәтелгән күренеш аша ла киләсәккә фараз ҡылырға мөмкин. Башҡорттарҙа Шүлгәнташ буйынса бик күп һәм төрлө тармаҡтарҙағы тикшеренеүҙәр булыуына ҡарамаҫтан, был сығанаҡтарҙы тиҙҙән урыҫ ғалимдарының тикшеренеүҙәре күләгәлә ҡалдырыуы ихтимал. Башҡорт Википедияһы менән ҡыҙыҡһына башлағас, башҡорт ғалимдарының күпселегенең эштәренең электрон варианты булмауы асыҡланды. Ә Википедия - ул тәү сиратта абруйлы сығанаҡтарға нигеҙләнеүсе глобаль энциклопедия. Һөҙөмтәлә сығанаҡтарҙы цифрлаштырыу буйынса алға китеүселәр мәҡәләләргә үҙҙәренең һылтанмаларын күрһәтеп, башҡорт ысынбарлығы ни тиклем дөрөҫ булмаһын, уны артҡы планға сығара. Бөгөн башҡорт тарихын Карамзин ул ваҡыттағы властарға оҡшағанса итеп 12 тапҡыр күсереп яҙыуы хаҡында һөйләйбеҙ ҙә, әммә хәҡиҡәтте күрһәтерлек абруйлы сығанаҡтарыбыҙ ҡайҙа? Шуның кеүек, әгәр бөгөн Шүлгәнташта Мәскәү вузы ғалимдары һәм студенттары тикшеренеү эштәре алып бара, экскурсоводтар "Европаны елеп үткән" кеүек кенә экскурсия үткәрә, Башҡортостан археологтары, туристарҙы ауыҙына ҡаратып ҡуйырлыҡ экскурсоводтар юҡ икән, саң ҡағырға һәм үҙебеҙҙең кадрҙарҙы әҙерләй башларға ваҡыттыр (һуңламаған булһаҡ әле!).

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Республикала "Алға, Башҡортостан!" әүҙем инвестициялар клубы булдырылды. Төбәк етәксеһе Радий Хәбиров тейешле указға ҡул ҡуйҙы. "Алға, Башҡортостан!" әүҙем инвестициялар клубы уңайлы инвестиция мөхите булдырыу, республиканың инвестиция потенциалын үҫтереү, шулай уҡ "Башҡортостан Республикаһының дәүләт власы органдары һәм инвесторҙар араһында үҙ-ара эш итеү һөҙөмтәлелеген арттырыу, инвестиция эшмәкәрлегенең көнүҙәк мәсьәләләре буйынса даими мәғлүмәт алмашыуҙы тормошҡа ашырыу" өсөн ойоштороlған.

✓Башҡортостанда сираттағы тапҡыр балыҡтарҙың күплəп ҡырылыуы теркәлгән. Был юлы белгестәр Ишембай районының Карасевка ауылы күлендә үле балыҡтар тапҡан. Һуңғы айҙа был - республика һыу ятҡылыҡтарында балыҡтарҙың күплəп һәләк булыуының дүртенсе осрағы.

✓Быйыл Башҡортостан Республикаһының Халыҡтар дуҫлығы йорто асылыуға 25 йыл тула. Учреждение 50-нән ашыу милли-мәҙәни ойошманы берләштерә һәм 17 тарихи-мәҙәни үҙәкте үҙ эсенә ала. Был датаны киң билдәләү күҙаллана, саралар көҙ буйына бара. Учреждениеның 25 йыллығы уңайынан Халыҡтар дуҫлығы йортоноң тарихына һәм хәҙергеһенә бағышланған альбом баҫыла. Төп тантана ноябрҙең икенсе яртыһына тәғәйенләнгән.

✓"Боронғо Өфө" тарихи-мәҙәни музей-ҡурсаулығы "Башҡортостандың туристик сувениры" республика конкурсында ҡатнашты. Музей-ҡурсаулыҡтың урта быуаттың уникаль ҡомартҡыһы "Өфө ҡаласығы - II" тураһында мәғлүмәт менән Меркатор фонында кеше башы төшөрөлгән "Хан" сувенир продукцияһы "Музей сувениры" номинацияһында беренсе урынды алды. Артефакттың төп нөсхәһе "Боронғо Өфө" музей-ҡурсаулығы фондтарында һаҡлана, ул VII-VIII быуаттарға ҡарай.

✓Башҡортостанда быйыл яңы ысул менән 8 800 саҡрым юлды, шул иҫәптән 2200 саҡрым төбәк юлын термопластик менән билдәләйҙәр. Хәҙер эштәр Нуриман, Балаҡатай, Ҡыйғы райондарында башҡарыла. Бынан тыш, муниципаль-ара юлдарға буяу менән билдә һалыу эше дауам итә. Бөгөнгө көнгә биш мең саҡрымдан ашыу юл билдәләнгән.

✓ *Июнь аҙағында Рәсәй Хөкүмәте ҡарары менән ҡартлыҡ йәки инвалидлыҡ буйынса страховка пенсияһына арттырылған түләүгә хоҡуҡ биргән ауыл хужалығы һөнәрҙәре, производстволары исемлеге киңәйтелде.*



ҠЫҪҠАСА

# ИКЕ ТАПҠЫРҒА...

**2019 йылдың июлендә Башҡортостанда йәшәүселәрҙең һаулыҡ һаҡлау өлкәһенә бәйле мөрәжәғәттәре июнь менән сағыштырғанда ике тапҡырға - 336 ялыуҙан 556-ға тиклем тиерлек артҡан.** Төп темалар иҫәбендә - табипҡа яҙылыуға бәйле мәсьәләләр, белгестәрҙең етешмәүе, хеҙмәткәрҙәрҙең эш сифаты һәм дарыуҙарға ҡытлыҡ. Республиканың һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһын башҡарыусы Максим Забелин быны хәҙер отпускылар мәле булыуы һәм махсус йүнәлешле белгестәргә ҡытлыҡтың нығыраҡ һиҙелә башлауы менән аңлатты. Шуға ҡарамаҫтан, Һаулыҡ һаҡлау министрлығы республика дауаханалары табиптарын район медицина учреждениеларына "күсереү" тәжрибәһен ҡуллана. Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров алдағы айҙа һаулыҡ һаҡлау учреждениеларында логистиканы ойоштороуға ентекле анализ әҙерләргә һәм шуның нигеҙендә хакимиәт башлыҡтары, баш табиптар менән һәр мәсьәләне тикшереү өсөн насар ун биләмәне билдәләргә ҡушты.

✓ **Башҡортостан аграрийҙары алдында 1,7 миллион гектар майҙанда иген һәм ҡуҙаҡлы иген культураларын йыйып алыу бурысы тора (уҙған йылға ҡарағанда 5 процентҡа аҙыраҡ).** "Быйыл беҙ игендән 3 миллион тоннаға яҡын уңыш көтәбеҙ, 1,3 миллион тонна көнбағыш, 850 мең тонна картуф, 320 мең тонна йәшелсә, 50-60 мең тонна рапс һәм гәрсис йыйып алырға ниәтләйбеҙ. Бөгөнгә майҙандарҙың 33 проценты урып һуғылған, гектарынан уртаса уңыш - 22,1 центнер", - тип билдәләне Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Хөкүмәте вице-премьеры - ауыл хужалығы министры вазифаһын башҡарыусы Илшат Фәзрахманов. Уңдырышлылыҡ буйынса Саҡмағош районы алда бара, урындағы игенселәр гектарынан 37 центнер бөртөклө ашлыҡ йыя.

✓ **"Башавтотранс" предприятиеһы халыҡ-ара, ҡала һәм ҡала яны маршруттарын хеҙмәтләндереү өсөн 110 "Форд Транзит" маркалы автобус алды.** "Беҙ "Башавтотранс"ҡа 1 сентябргә дәүләт ташыусыһы автобустары республиканың барлыҡ райондарын Өфө менән тоташтырырға тейеш тигән бурыс ҡуйғайныҡ. Тап "Башавтотранс" социаль ташыуҙарҙы тәьмин итә һәм коммерция автобустарынан айырмалы рәүештә ул хатта ике пассажирҙы ла йөрөтә. "Башавтотранс"ты ни өсөн һаҡлап ҡалыуыбыҙҙың мәғәнәһе лә шунда. Уларға ҙур автобустарҙың тәүге партияларын тапшырҙыҡ та инде. Бөгөн - 110, киләһе аҙнала тағы ла 100 автобус бирәбеҙ. Дөйөм алғанда, яҡынса 550 автобус. Был халыҡ өсөн ҡыуанысла ваҡиға. Бөгөн 16 Өфө пассажир автотранспорт предприятиеһы автобуслы була", - тине Радий Хәбиров, журналистарҙың һорауҙарына яуап биреп.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҺАҠСЫЛ ФАЙҘАЛАН!

**Республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығының яңы етәксеһе Урал Искәндәров алдында торған тәү сираттағы бурыстарҙы билдәләне.**

Республика етәксеһе әйтеүенсә, ул министрлыҡтан, атап әйткәндә, тәбиғи ташты рөхсәтһеҙ сығарыу осраҡтарын бөтөрөү йәһәтенән ныҡлап эшләүен көтә. Ул 8 августа Башҡортостандың Белорет районында лицензияһыҙ ҡатламлы таш сығарыу менән шөғөлләнгән Силәбе фирмаһы эшселәрен тотоуҙы миҫалға килтерҙе. Предприятие директоры элек урман ҡырҡҡан өсөн хөкөмгә тарттырылған булған. "Улар оятһыҙ рәүештә һәм ышаныслы эшләй. Эҙләүгә лицензия алып, шунда уҡ ауыр техника, һаҡсылар, төрлө коммуникация саралары һәм, әйтеүе лә ҡурҡыныс, урындағы чиновниктар һәм көс структуралары араһындағы бәйләнештәр менән эшкә тотона, - тип яҙғайны Радий Хәбиров бынан алда социаль селтәрҙә. - Уларҙың үҙҙәренең танау аҫтында ошондай масштабты "күрмәүенә" ышанмайым. Бизнестың әйләнеше бик ҙур".

"Был - һеҙҙең ведомствоның эшләп еткермәүе, - тип билдәләне республика етәксеһе оператив кәңәшмәлә. - Минеңсә, быға Хөкүмәттә йәлеп итмәҫкә лә мөмкин ине. Әгәр урында башлыҡ, министрлыҡтың территориаль бүлексәһе бер юлы шөғөлләнһә, бындай хәл булмаҫ ине. Минең ошо ташҡа ҡанығыуым үҙмаҡсат түгел, маҡсатым - министрлыҡтан башланған эште тамамлауҙы талап итеү. Был ташҡа, урман ҡырҡыуға һәм башҡаларға ҡағыла. Атҡараһы эштәр байтаҡ. Шуға иғтибар итеүегеҙҙе һорайым".

# ТАБИПҠА ЯРҘАМ

**Башҡортостан Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров "Һаулыҡ һаҡлау сәғәте" видеоселектор кәңәшмәһендә Өфө һәм район дауаханалары табиптарына 2019 йылда эш башлаған медицина хеҙмәткәрҙәренә социаль ярҙам республика программалары сертификаттарын тапшырҙы.**

Анестезиологтар, реаниматологтар, офтальмологтар, терапевтар, педиатрҙар, гинекологтар 500 меңдән алып 1 миллион һумғаса матди ярҙам алды. Республика етәксеһе табиптарға ошо һөнәрҙе һайлағандары һәм тап районда эшләгәндәре өсөн рәхмәт белдерҙе. "Бөгөн беҙ ике программа буйынса сертификаттар бирҙек. Уларҙың береүһе - "Ауыл табибы", уның буйынса ҡайһы бер йөкләмәләр үтәлмәгән, - тип билдәләне Радий Хәбиров. - Өҫтәүенә, махсус йүнәлешле белгестәр дәртләндерелә. Беҙ аҡса таптыҡ, ә һеҙ уларҙы дөрөҫ файҙаланығыҙ һәм һәйбәт эшләгеҙ". Кәңәшмәлә республиканың һаулыҡ һаҡлау министры вазифаһын башҡарыусы Максим Забелин һүҙҙәренсә, 2018 йылдың 1 октябренән төбәктең медицина учреждениеларына табиптарҙы йәлеп итеүҙең ыңғай динамикаһы күҙәтелә. Ошо осорҙа 240 һаулыҡ һаҡлау өлкәһе хеҙмәткәре, шул иҫәптән беренсел звенолағы медицина хеҙмәткәре эшкә урынлаштырылған. Шул уҡ ваҡытта әлегә Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы тиҙ ярҙам хеҙмәткәрҙәре һаны кәмеүҙең кире тенденцияһын еңеп сыға алмай. 2019 йылдың 1 ғинуарынан ошо хеҙмәткә бер фельдшер эшкә урынлашҡан, ә 14-е унан киткән.

# ТОРЛАҠ БАҘАРЫНДА...

**Башҡортостанда льготалы торлаҡ баҙарында алыпһатарлыҡты туҡтатҡан закон көсөнә инде.**

"Республикала 2014 йылдан "Торлаҡ төҙөлөшө өсөн аҡса туплау" программаһы эшләй. Ул тәүҙә 3-6 йыл дауамында аҡса йыйыуҙы күҙ уңында тота. Ошо аҡсаға республика бюджетынан субсидия иҫәпләп өҫтәлә, шунан һуң льготалы ставка буйынса торлаҡ кредиты һәм махсус хаҡ буйынса торлаҡ һатып алыу мөмкинлеге бирелә. Шундай осраҡтар ҙа бар: ҡайһы бер граждандар махсус рәүештә ошо программала ҡатнаша һәм, вкладта аҡса йыймайынса, шунда уҡ льготалы хаҡ буйынса торлаҡ һатып алыуға өлгәшә. Артабан уны һатып ебәрә", - тине Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев.

Парламент рәйесе ҡабул ителгән закондың үрҙә әйтелгән гәмәлдәрҙе башҡарыуға юл ҡуймауын һәм республиканың льготалы торлаҡ һалыу өсөн ойоштороло коммерцияға ҡарамаған ойошмаларының торлаҡ һатыу тәртибен яҡшыртыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Хәҙер "Торлаҡ төҙөлөшө өсөн аҡса туплау" программаһының барлыҡ шарттарын үтәгәс кенә ошондай торлаҡ алырға мөмкин. Закон республикала һаҡлыҡ-ипотека механизмдарының төп принциптарын тулыһынса һаҡлауҙы тәьмин итә, алып һатыу маҡсатында льготалы торлаҡ һатып алыу мөмкинлеген бирмәй", - тине Константин Толкачев.

# АУЫЛ КЕШЕҺЕНӘ...

**Башҡортостанда 57,1 меңдән ашыу ауыл кешеһе страховка пенсияһына арттырылған түләү ала, тип хәбәр итте Пенсия фондының республика бүлексәһе идарасыһы Фоат Хантимеров.**

Хәбәр ителеүенсә, ауыл хужалығында 30 йылдан да кәмерәк эшләмәгән, бөгөнгө көндә хаҡлы ялда булған һәм ауыл ерендә йәшәгән пенсионерҙар страховка пенсияһына билдәләнгән түләүҙе 25 процентҡа арттырыу хоҡуғына эйә. Июнь аҙағында Рәсәй Хөкүмәте ҡарары менән ҡартлыҡ йәки инвалидлыҡ буйынса страховка пенсияһына арттырылған түләүгә хоҡуҡ биргән ауыл хужалығы һөнәрҙәре, производстволары исемлеге киңәйтелде. Уны ауыл хужалығы техникаһын һәм етештереү ҡорамалдарын хеҙмәтләндереү, йүнәтеү, шул иҫәптән ауыл хужалығының етештереү объекттарын һаҡлау менән бәйле һөнәрҙәр тулыландырҙы. Бынан тыш, исемлеккә ауыл хужалығы тауарҙарын етештергән шәхси эшҡыуарҙар индерелде. "Ошо өҫтәмәләргә бәйле Пенсия фонды идаралыҡтарында пенсия түләү эштәре материалдары буйынса 2019 йылдың 1 ғинуарынан түләүҙе ғаризаһыҙ арттырыу мөмкин булған кешеләрҙе асыҡлау эше башҡарылды. Пенсионер теләһә ниндәй ваҡытта арттырылған түләүгә хоҡуғын раҫлаған өҫтәмә документтар тапшырырға мөмкин. 2019 йылдың аҙағына тиклем мөрәжәғәт иткәндә ҡабаттан иҫәпләү эштәре ошо йылдың 1 ғинуарынан башҡарыла", - тине Фоат Хантимеров.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөнөң Еңеү паркында Китап кәштәһе менән таныштырыу булды. Уның инициаторы - "Российская газета" баҫмаһының Өфө филиалы редакцияһы. Бәләкәй генә ағас өй хәрби техника янындағы майҙансыҡта урынлашҡан. Теләгән һәр кем үҙенә оҡшаған китапты йәки журналды алып уҡый ала. Иң мөһиме, алмашҡа икенсе китап ҡалдырырға онотмаҫҡа кәрәк.

✓Баш ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары - ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре идаралығы начальнигы итеп Евгений Чебаков тәғәйенләнде. Быға тиклем ул мэрияның хоҡуҡ идаралығы начальнигы вазифаһын биләне. Билдәләнеүенсә, Евгений Чебаковтың хоҡуҡи секторҙа, ер ресурстары менән идара итеү һәм ҡала төҙөлөшө контроле өлкәләрендә эшләү тәжрибәһе ҙур.

✓Өфөнән йәш футболсылар "Донъя кубогы" футбол буйынса бишенсе халыҡ-ара турнирында икенсе урынды алды. Ярыш 6-12 августа Өфөнөң туғандаш ҡалаһы Шеньянда (Ҡытай Халыҡ Республикаһы) уҙҙы. Унда ете илдән дүрт мең спортсы ҡатнашты. Хәл иткес уйында өфөләр турнир хужалары - Ҡытайҙың Чжецзян провинцияһынан "Страус" командаһы менән көс һынашты.

✓Башҡортостанда "Йөрәк һүҙе" телевизион шиғриәт конкурсы уҙасаҡ. Башҡортса үткән ижади бәйгелә һөнәри актер йәки режиссер белеме булған кешеләр ҡатнаша ала. Һайлап алыу турында SMS аша тауыш биреләсәк һәм баһалама ағзалары тауыш бирәп, конкурс ярымфиналсыларын асыҡлаясаҡ. Иң күп тауыш алған 18 кеше телепроекттың йомғаҡлау кисәһендә ҡатнашасаҡ.

✓2019 йылдың аҙағына тиклем Төркиәнең Истанбул ҡалаһында Башҡортостандың Сауҙа вәкиллеген асыу күҙаллана. "Бер ай элек республика вәкиллеген Австрияла астыҡ, йыл аҙағына тиклем ошондай структура Төркиәлә, Истанбулда ла барлыҡҡа киләсәк. Әлеге ваҡытта сауҙа йорттарыбыҙ Словакияла, Болгарияла һәм Чехияла эшләй", - тине республика Башлығы вазифаһын ваҡытлыса башҡарыусы Радий Хәбиров.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

✓ *Башҡортостандың баш ҡалаһы - Өфө - рейтингта 0,22 Добсон берәмеге күрһәткесе менән 8-се урын алған. Тикшеренеүҙәрҙең беренсе урынында - Мәскәү (0,78), икенселә Санкт-Петербург (0,38) урынлашҡан.*



ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

**2020 йылда илде мөһим ваҡиға көтә - 1 октябрҙән 31 октябргә тиклем Бөтөн Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу буласаҡ. Һәр айырым төбәктең социаль-иҡтисади торошон күҙ алдына баҫтырырға ярҙам иткән был мөһим сара аҙаҡҡы тапҡыр 2010 йылда үткәйне. Был ваҡыт эсендә илдә, һис шикһеҙ, әллә күпме демографик үҙгәрештәр булыуы асыҡ: донъя булғас, тыуымы ла, үлеме лә, никахҡа инеүселәре лә, айырылышыуҙар ҙа, йәшәү урынын алыштырыусылар ҙа бар. Кеше йәшәйеше генә түгел, ауыл-ҡалаларҙың йөҙө лә алышына, яңы йорттар, урамдар барлыҡҡа килә. Өфө ҡалаһы Бөтөн Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуға нисек әҙерләнә һуң? Ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге сираттағы оператив кәңәшмәлә һүҙ ошо хаҡта барҙы.**

# ӘҘЕРЛЕК БАШЛАНА...

## халыҡ иҫәбен алыуға

Өфө ҡалаһы хакимиәтенең дәүләт статистикаһы бүлеге етәксеһе Оксана Даянова билдәләүенсә, йыл аҙағына тиклем башҡарыласаҡ мөһим эштәрҙең береһе - халыҡ иҫәбен алыуҙы ойоштороуҙың аныҡ планын төҙөү. Быныҡ өсөн ҡаланың сиктәре билдәләнә, кеше йәшәгән йорттар һәм башҡа биналар тураһында мәғлүмәт туплана, шулай уҡ теркәлгән адрес буйынса йәшәүселәр иҫәбе асыҡлана. Иҫәп алыуҙар башланғас та эштең тулы һәм әүҙем барыуы өсөн тап адрес хужалығы торошо төп шарт булып тора. Яңы микрорайондар төҙөлә, иҫкеләренә реконструкция үткәрелә, шул рәүешле адрес хужалыҡтары ла үҙгәрештәр кисерә.

2020 йылда халыҡ иҫәбен алыуҙы ойоштороуҙа үҙгәрештәр ҙә бар. Мәҫәлән, унда мәғлүмәтте мөмкин тиклем цифрлаштырыу ҡаралған. Быныҡ өсөн махсус программа ҡуйылған планшеттар ҡулланылаҫаҡ, тип көтөлә. Оксана Даянова әйтеүенсә, баш ҡалала яҡынса 3 мең кеше өйҙән-өйгә йөрөп, халыҡ иҫәбен аласаҡ. Заманса технологиялар менән бер рәттән, беҙ өйрәнгән ҡағыҙ һорауламалар ҙа буласаҡ. Рәсәй халҡы Дәүләт хеҙмәте берҙәм порталында ла теркәлеү үтә ала. Шулай уҡ Күп функциялы үҙәктәрҙә лә халыҡ иҫәбен алыу участкалары ҡаралған. "Беҙҙең алдыбыҙҙа бик мөһим мәсьәлә тора. Халыҡ иҫәбен алыу һөҙөмтәләре - халыҡтың иҫәбе, йәше буйынса муниципалитеттар киләһе 10 йылға эш пландары төҙөйәсәк. Демографик сәйәсәттә дөрөҫ һәм һөҙөмтәле итеп ойоштороуҙың төп нигеҙе ошо", - тине ҡаланың дәүләт статистикаһы бүлеге етәксеһе. Ысынлап та, башҡа бер ниндәй саралар һәм ысулдар ҙа халыҡтың милләте, белем кимәле, туған телендә һөйләшеүселәр иҫәбе, хатта төбәктәрҙәге тыуым, миграция торошо тураһында тулы мәғлүмәт бирә алмай. Халыҡ иҫәбен алыуҙа ҡатнашыу һәр кемдең үҙ иркендә, әммә киләсәктә милли проекттар һәм социаль программалар ошо һандарға ҡарап эшләнәсәген һәр кем хәтерендә тоторға тейеш. Ә Бөтөн Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуҙың тәүге һөҙөмтәләре 2021 йылдың апрелендә билдәле буласаҡ.

Ултырышта ҡаралған тағы бер ҡыҙыҡлы тема малсылыҡ продуктарын электрон ветеринар сертификациялауға ҡағылды. Федераль законға ярашлы, 2018 йылдың 1 июленән "Меркурий" федераль дәүләт мәғлүмәти ситемаһында ветеринар контроль үтергә тейешле тауарҙарға мотлаҡ электрон сертификация индерелгәйне. Элек етештерелгән тауарҙың сифаты тураһындағы мәғлүмәт ҡағыҙ документтарға теркәлә ине. 2019 йылдың 1 июленән был өлкәлә эшмәкәрлек итеүсе бөтөн компаниялар, әйтәйек, ит комбинаттары, ҡош фабрикалары, һөт заводтары, диңгеҙ ризыҡтары етештереүселәр, сауҙа селтәрҙәре, хатта бәләкәй магазиндар ҙа "Меркурий" системаһында электрон формала ветеринар сертификаты алырға тейеш. Йәғни, ошо система ярҙамында продуктты етештерелгән урынынан алып магазин кәштәһенә барып ятҡансы күҙәтергә мөмкин. Был яңылыҡты ябай һатып алыусы күреп өлгөрҙө лә инде - магазин кәштәләрендә, мәҫәлән, "һөттән эшләнгән" һәм "һөт ризыҡтары" тигән яҙыуҙар барлыҡҡа килде. "БР Өфө ҡала ветеринария станцияһы" учреждениеһы етәксеһе Дамир Хузин билдәләүенсә, 1 июлдән ит һәм балыҡ консервалары, составында ит, субпродукттар, балыҡ булған башҡа бөтөн ризыҡтар, мәҫәлән, ярымфабрикаттар, һөттән эшләнгән аҡ май, ҡуйыртылған һөт, һөт өҫтө, ҡырылған, иретелгән сырҙар махсус контроль күҙәтеүенә алына. Ит продукцияһы өсөн электрон теркәлеү бер йыл элек ингәйне.

**Ләйсән ДАЯНОВА әҙерләне.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ҺУНАРҒА...

**Башҡортостанда йәшәүселәр бар Рәсәй халҡы кеүек һунарҙа уҡ-һаҙаҡ һәм арбалетты алыҫҡа ырғытыусы һалҡын ҡорал йәһәтендә ҡуллана аласаҡ. Был турала Дәүләт Думаһы закон ҡабул итте.**

Закон авторҙары - депутаттар төркөмө белдереүенсә, уҡ-һаҙаҡ менән һунар итеү егерменән ашыу илдә рөхсәт ителгән. Рәсәйҙә иһә йөҙәрләгән мең граждан бындай ҡорал төрөнә эйә, тик улар уны спортта ғына ҡуллана ала. Парламентарийҙарҙың фекере буйынса, уҡ-һаҙаҡты һунар ҡоралы итеп легалләштереү илдәге һунар индустрияһы үҫешенә һәм Рәсәйҙең һунар державаһы итеп танылыуына килтерәсәк. Граждандар бындай ҡоралды биш дананан артыҡ лицензияһыҙ һатып алырға мөмкин. Уны Рәсәй Милли гвардияһында теркәргә кәрәк буласаҡ. Ҡорал алыусының һунар билеты һәм һунар ҡоралын һаҡлау һәм йөрөтөүгә рөхсәт булыуы шарт.

Законда уҡ-һаҙаҡҡа "составында көсөргәнеш хәлендә нығытыу механизмдары булмаған алыҫҡа ырғытыусы атыу ҡоралы" тигән аңлатма индерелгән. Шулай уҡ уның дуға көсө 27 килограмм-көс дәүмәленән артырға тейеш. Документта арбалет тураһында ла тасуирлана - уның көсө 43 кгс-тан артырға тейеш. Һунар итеү яйланмаһына "алыҫҡа ырғытыусы һунар уҡсы ҡоралы һәм уның алыҫҡа ырғытылған снарядтары" ла инә. Уҡ-һаҙаҡты һәм арбалетты үҙ-үҙеңде яҡлау маҡсатында алып йөрөү тыйыласаҡ. Закон рәсми рәүештә баҫылғандан алып 180 көндән үҙ көсөнә инәсәк.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

## ФӘҠИРҘӘР ИШӘЙӘ

**"Эксперт" агентлығы аналитиктары Рәсәй төбәктәренең фәҡирлек картаһын төҙөгән. Беҙҙең республика илдең тағы ла 38 субъекты менән бергә "уртасалар" рәтендә тора. Тикшереүселәр мәғлүмәте буйынса, Башҡортостанда фәҡирҙәр өлөшө 10,5 проценттан 17,5 процентҡа тура килә.**

"Төбәктәр буйынса фәҡирлек кимәлен һанап сығарыу өсөн беҙ һәр төбәктең модаль (иң йыш осраған) килеме менән шул төбәк йәшәү кимәле минимумына нисбәтен һанап сығарҙыҡ. Шулай уҡ һәр төбәктең йәшәү кимәленән түбән аҡса килеме булған халыҡ өлөшө тураһындағы мәғлүмәтте Росстаттан алдыҡ", - тиҙәр картаны төҙөүселәр. Башҡортостанда модаль (иң йыш осраған) килем төбәктең 1,25 һәм 1,5 йәшәү минимумын тәшкил итә. Иң "бай" төбәктәр тип аналитиктар Мәскәү, Санкт-Петербург, Мәскәү өлкәһе, Тула, Липецк, Курск, Белгород, Воронеж, Ленинград, Түбәнге Новгород, Свердловск, Сахалин өлкәләре, Ямал-Ненец һәм Чукот автономлы округтарын һанаған. "Иң фәҡир төбәктәргә (улар 31) Кавказдың барыһы ла тиерлек, Себерҙең, Волга буйының күп өлөшө ингән. Унда модаль килем йәшәү минимумынына тура килә йәки уның 1,25 нисбәтен тәшкил итә. Бында фәҡир халыҡтың һаны 40 проценттан арта", - тигән "Эксперт" агентлығы. Тыва һәм Ингушетияла халыҡтың модаль килеме йәшәү минимумынан түбәнерәк, фәҡирҙәр һаны 32 проценттан 41,5-ҡа барып етә.

## ИҢ БЫСРАҠМЫ?

**Greenpeace бойондороҡһоҙ халыҡ-ара коммерцияға ҡарамаған ойошма Tropomi спутник проектынан 2018 йылдың июненән 2019 йылдың майына тиклемге мәғлүмәттәрҙе өйрәнгән. Улар нигеҙендә һауаның азот диоксиды (NO2) менән ныҡ бысранған Рәсәйҙең ҙур ҡалалары рейтингын төҙөгән.**

Башҡортостандың баш ҡалаһы - Өфө - рейтингта 0,22 Добсон берәмеге күрһәткесе менән 8-се урын алған. Тикшеренеүҙәрҙең беренсе урынында - Мәскәү (0,78), икенселә Санкт-Петербург (0,38) урынлашҡан. Ошо ҡалаларҙа һауаның бысраныуы автомобилдәр һанының күп булыуы менән аңлатыла. NO2 кимәле буйынса тәүге биш иң бысранған ҡалалар исемлегенә шулай уҡ Силәбе (0,38), Новосибирск (0,35) һәм Красноярск (0,31) ингән. Туғыҙынсы урында - Ҡаҙан (0,19), унынсыла - Омск (0,19). Азот диоксиды - ул хәүефле ағыулай торған газ. Ул киҫкен тәьсир иткәндә респиратор симптомдары һәм үпкә ауырыуҙарын ҡуҙғата һәм оҙаҡ тәьсир иткәндә ҡайтмалы ауырыуҙар хәүефен арттыра. Азот диоксидының оҙаҡ тәьсир итеүе бөтә донъяла үлем кимәленең артыуы менән бәйле. Сөнки азот диоксиды - янған яғыулыҡ продукты ул, ә уның Рәсәйҙең ҙур ҡаларында төп сығанағы булып автотранспорт тора. Азот диоксидының концентрацияһы буйынса ҡала һауаһының ни тиклем бысраныуын билдәләргә була. Greenpeace вәкилдәре властар һауаның бысраныу кимәле тураһында спутник мәғлүмәттәрен онлайн режимында баҫып сығарырға һәм уның нигеҙендә мәсьәләне хәл итеү буйынса саралар күрергә тейеш тип иҫәпләй. Greenpeace ойошмаһының Рәсәйҙәге вәкиллеге Ҡулланыусыларҙың хоҡуҡтарын яҡлау һәм кеше именлеге өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттән ошо аҙымдарға өлгәшә. Ул да ҙур ҡалаларҙа түбән экологик класлы машиналарҙың хәрәкәтен сикләү зоналары индереү яҡлы.

## Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы

**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Кукуруз сәкәне

❖ Башҡа бер генә йәшелсәнең составында ла алтын юҡ, ә бына кукурузда бар. Ул баш мейеһен яҡшы эшләтә.

❖ Колит булғанда һәм бауыр ауыртҡанда бешкән кукурузға аҡ май ҡушып болғап ашарға.

❖ Төрлө сәбәптән ашҡаҙан ауыртһа, кукурузды иҙеп әҙерләгән ризыҡ ярҙам итә.

❖ Кукуруз үҫемлек епсәләренә бай, әммә унда елем (йәбешкәк матдә) юҡ. Был эсәктәр эшмәкәрлегенә һәм яман шеш булдырмауға ярҙам итә. Ә елем булмауы шәкәр сиренән һәм артыҡ ауырлыҡтан интегеүселәргә файҙалы ризыҡ.

❖ Кукуруз сәкәнендә ҡандағы холестеринды яйлаусы, матдәләр алышыуын яҡшыртыусы В4 витамины күп. Ә организм В4 витаминына ихтыяж кисермәһә, кәүҙәне үҙе тейешле ауырлыҡта тотасаҡ.

❖ Әммә ҡан ойошоусанлығы юғары булған кешеләргә кукурузды сама менән ашарға кәрәк.

### Ҡабаҡ

❖ Мин бәләкәй саҡта беҙҙең ауыл халҡы бер устай ғына ер ҙә ҡалдырмай, ҡабаҡ сәсә ине. Өй баҙына кәм тигәндә 200-250 баш ҡабаҡ теҙеп ҡуя инек. Әле лә үҙем сәсәм. Ҡабаҡта С, В1, В2, Е, РР, D витамины, кальций, калий, тимер, магний, фтор күп. Ҡабаҡты йыл әйләнәһенә һаҡлаһаң да, файҙалы үҙенсәлеге кәмемәй.

❖ Ҡабаҡтан ярма ҡушып бутҡа, манты, бәлеш, ҡайнатма һ.б. ризыҡтар эшләп була. Улар ашҡаҙанға һәм эсәккә ыңғай йоғонто яһай. Бөйөр ауырыуынан шешенеүселәргә, юғары ҡан баҫымлыларға ҡабаҡ ашау мотлаҡ.

❖ Ҡабаҡ һуты эс ҡатыуҙы бөтөрә.

❖ Аҙ ҡанлылыҡ булғанда ҡабаҡты ҡырғыстан ҡырып, сей көйөнә ашарға кәрәк.

❖ Шәкәр сиренән, артыҡ ауырлыҡтан интегеүселәргә лә ҡабаҡ ризыҡтары ярҙам итә.

❖ Өлкәндәр ҡабаҡ ашаһа, тәндәге артыҡ холестериндан ҡотолор.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛИНА.**

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# МЕҢЙӘШӘР БАШҠОРТТОҢ МЕҢ ЫРЫУЫНАН БЕҘ

**Мең ырыуы, табындар кеүек үк, төрлө сығышлы этник берләшмә булып тора. Ғалим-этнолог Р.Ғ. Кузеев классификацияһына ярашлы, улар көньяҡ-көнбайыш башҡорттарының Дим буйы төркөмөнә ҡарай.**

Мең башҡорттары XVII - XIX быуаттарҙа Дим йылғаһы үренән уның тамағына тиклем киң бассейнды биләй. Шулай уҡ уларҙың аҫаба ерҙәре Өршәк йылғаһы буйҙарында, Ҡандраҡүл һәм Асылыҡүл араһында, Сәрмәсән йылғаһы үрендә була. Мең ырыуы биләгән аҫаба ерҙәр, башҡа башҡорт ырыуҙарына хас булғанса, кесе ырыуҙар, түбә-аймаҡтар ерҙәренә бүленә, үҫешә барған вағыраҡ ырыу бүлемдәре лә айырым, ниндәйҙер кимәлдә үҙ аллы этник берәмек булып формалаша башлай. Шунлыҡтан XVIII быуатҡа ҡараған документаль сығанаҡтарҙа мең ырыуы составында 17-гә тиклем айырым бүлемдәр күрһәтелгән (П.И. Рычковтың исемлегендә 13 бүлем). Р.Ғ. Кузеев меңдәрҙең барлығы 7 төп ырыу бүлеме булыуын билдәләй: мең, ил-күл-мең (күл-илемең), ҡырҡөйлө-мең, ҫыба-мең, меркет-мең, ҡыбау-мең, ҫарылы-мең (һарайлы-мең). Айырым ырыу бүлемдәре йыш ҡына ошо яңы нәҫел линияһын башлаусы ырыу башлыҡтары - кенәздәрҙең исемен элекке атамаға өҫтәү юлы менән хасил була: аҙнай-ил-күлмең, ҡунҡаҫ-ил-күл-мең, илсекәй-ил-күл-мең. Тора-бара был атамалар ҡыҫҡартыла биреп, аҙнай-мең, дистан-мең, илсекәй-мең, яйыҡсы-мең, тип йөрөтөлә башлай. Ҫарылы-мең (һарайлы-мең) түбәһенә ҡараған башҡорттар XVIII быуат аҙағында документаль сығанаҡтарҙа осрамай, күрәһең, улар башҡа ырыу бүлемдәре составына инеп юғалған. Ошоға тиклем ҫарылы (һарайлы)-меңдәрҙең һуңғы вәкилдәренең Ыҡ йылғаһының түбәнге ағымында, "Минзәлә һәм Итиль йылғаһы араһындағы ерҙәрҙә" йәшәүе хаҡында яҙмалар бар.

XII-XIII быуаттарҙа мең башҡорттарының ата-бабалары төрки-ҡыпсаҡ донъяһының бер өлөшөн тәшкил иткән. XIV быуатта улар ҡатайҙар менән тығыҙ бәйләнештә йәшәй. Был осорҙа улар көнбайыш Башҡортостандың Ыҡ, Ялан Зәйе, Минзәлә, Сөн йылғалары буйҙарын төйәк иткән. Ҡобаумең башҡорттарында (ҡатайҙар һәм ҡошсоларҙағы кеүек) әле йәшәгән ерҙәренә Мәләкәс йылғаһы буйынан күсенеп килеүҙәре хаҡында риүәйәт бар. Ҡобауҙарҙың мәләкәс-ҡобау тип аталған түбәһе лә билдәле. Күл-мең башҡорттарында Ҡунҡаҫ һәм Иштәкә исемле аҡһаҡалдары етәкселегендә Ыҡ буйҙарынан Дим үҙәненә килеүҙәре хаҡында ла хәтирәләр йәшәй.

Мең ырыуы боронғо төрки халыҡтары мөхитендә (VI - VIII быуаттар), Саян-Алтай төбәгендә хасил була, уның формалашыуында уғыҙ-ҡыпсаҡ факторының көслө йоғонтоһо тойола. Заманында мең атамаһы аҫтында билдәле булған ҡәүем вәкилдәре урта быуаттарҙа Дәште Ҡыпсаҡ дәүләтендә, Мәверәннәхрҙә юғары дәрәжәләргә эйә була, төрки халыҡтары сәйәсәтендә ҙур роль уйнай. Улар Тимуридтар дәүләте эшмәкәрлегендә туранан-тура ҡатнаша, ә XVIII - XIX быуаттарҙа Коканд ханлығында хакимлыҡ итеүсе династияға мең ҡәбиләһенең күренекле шәхестәре нигеҙ һала. XVII быуатта йәшәгән Хива хакимы, тарихсы Әбүл Ғази Баһадур-хан үҙе төҙөгән легендар генеалогияға Мең исемен дә индергән: "Бәғзе берәүҙәр Яфетты бәйғәмбәр, тип әйтә, башҡалары быны инҡар итә. Яфет, атаһының бойороғо буйынса, Джуди тауынан төшөп, Итиль һәм Яйыҡ йылғалары ярҙарына барып етә, унда 250 йыл йәшәп, вафат була. Уның 8 улы була, уларҙан күп һанлы нәҫел ҡала. Улдарының исемдәре ошолай: Төрк, Хазар, Саклаб, Рус, Мең, Чин, Кимар, Тарх".

Мең ырыуының боронғо тарихы менән бәйле риүәйәттәрҙә үҙҙәренең ата-бабаларының Монголия, Алтай тарафтарында йәшәүе, Төкләата, Сәсле-ата, Ҡорсоба-ата исемле батыр заттарҙың данлы эштәре, оло яуҙар ҡубып, яңы ерҙәргә күсеп китеүҙәре хаҡында һөйләнелә. XIX быуатта ғалим Сәғит Мирасов тарафынан табылған шәжәрәлә меңдәр нәҫеле һун ханы Баламирға (IV быуат) барып тоташыуы хаҡында мәғлүмәт теркәлгән.

Мең ырыуы атамаһының килеп сығышын, "Кисса-и Сыңғыҙ хан" дастанына һылтанып, ырыу башы Урҙас бейҙең "Мең һаҙаҡлы" тигән ҡушаматы булыуы менән аңлаталар. Сыңғыҙ хан Урҙас бейгә бына ниҙәр әйткән, имеш: "Эй, Мең һаҙаҡлы Урҙас бей! Үтә бай булып, үҙең менән мең яугир алып сыға алғанға шулай тигәндәр, ағасың һинең ҡайын, ҡошоң - ҡарсыға, ораның - "Алаҫ!" булһын!"

Мең башы Урҙас бейҙең икенсе исеме Санаҡлы булып, уның Мәверәннәхрҙә Сығатай династияһы хандарынан һуң (XIV быуат урталарында) ханлыҡ ҡылыуы хаҡында мең шәжәрәләренең береһендә әйтелә. Һуңынан меңдәр Аҡһаҡ Тимер дәүләте алып барған яуҙарҙа ҡатнаша, уларҙың бер өлөшө Туктамыш хан яғына сыға. Күрәһең, тап ошо даулы заманда мең ырыуына ҡараған төркөмдәр Һырдарья буйҙарынан Урал тарафтарына йүнәлә.

Мең этнонимы шулай уҡ нуғай, ҡырғыҙ һәм үзбәк халыҡтарында ла осрай. Нуғайҙарҙың "мынь-куп", ҡырғыҙҙарҙың джедигер ҡәбиләһендә "меңь- ҡытай" тип аталған этник төркөмдәр булған. Үзбәк тарихында меңдәр "хитай" исемле икенсе бер ҡәбилә менән иң һуғышсан ҡәүемдәр рәүешендә билдәле була. XVII быуатта Сәмәрҡәндтән көньяҡ-көнбайыштараҡ мең исемле үзбәк ҡәбиләһе йәшәүе хаҡында документаль сығанаҡтар бар. Тарихсы В.В. Радлов мең ырыуынан сыҡҡан Коканд хандары булыуына иғтибар итә.

Хива хакимы Әбүл Ғази яҙыуынса, Үзбәк хан үҙ халҡын, илдә тыныслыҡ урынлаштырыу, ыҙғышталаш булдырмау маҡсатында 4 төркөмгә бүлә. Меңдәр уйғырҙар менән бер төркөмгә эләгә. Һуңынан уның улы Дженибек хан Санклы-Син исемле уйғырҙы Ургенч, Балхан һәм Маңғышлаҡ тарафтарындағы баш бирмәҫ төркмәндәргә ҡаршы ебәрә. Бында һүҙ меңдәрҙең Санаклы, халыҡта Мең һаҙаҡлы Урҙас бей, тип аталған ырыу башлығы хаҡында бара.

Мең ырыуының монгол сығышлы булыуы ихтималлығы хаҡында ла ғилми ҡараштар бар. Г.Н.Потанин монголдарҙың мынг, һуңғараҡ мингат, тип аталған этник төркөмөнөң башҡорт меңдәренә нәҫелдәш булыу мөмкинлеген инҡар итмәй. Хәҙерге заманда Монголияның Кобдосс аймағында йәшәүсе мингаттар ойрат теле диалектында һөйләшә. Әммә был осраҡта, урта быуаттарҙа төрки-монгол бәйләнештәренең бик яҡын булыуын иҫәпкә алғанда, бер ҡәүемдең этнонимы икенсе бер халыҡ теленә үтеп инеп, оҡшаш этник атамалар барлыҡҡа килеүе лә ысынбарлыҡҡа тап килергә мөмкин. Меңдәрҙең Урта Азия уғыҙҙары араһына үтеп инеүе монгол экспансияһынан күп быуаттарға алдараҡ башлана. Мәҫәлән, Һырдарья уғыҙҙары менән тығыҙ аралашып йәшәгән Нуратин төркмәндәре фольклорында көнбайыш тарафтарға күсеп киткән уғыҙ ҡәбиләләре башлыҡтары Аҡман менән Ҡараманды уларҙы үҙҙәре менән китергә саҡырыуы хаҡында бәйән ителә. Шул уҡ Аҡман һәм Ҡараман мең мөхитендә тыуған риүәйәттәрҙә йыш телгә алына.

ЙОЛАҢДАН ЙҮН ТАП!

# БАШҠОРТ БАЛАҪЫ

**Композиция йыш ҡына ҡуш ромбтан тора - улар икеһе бер үк йәки төҫтәре буйынса ғына айырыла. Нестеров исемендәге Башҡорт художество музейы фондында һаҡланған игеҙәк ромблы иң сағыу һәм матур баластарҙың береһе 1979 йылда донъя күргән "Башҡорт халҡының биҙәү-ҡулланма сәнғәте" китабында баҫылған.**

Биҙәк башлыса һары ҡыҙыл, һары, йәшел, ҡыҙыл төҫтәрҙән һуғылған, баластың мөйөшөндә асыҡ-һоро, сирень төҫө осрай. Һары ҡыҙыл фондағы ромбтар эсендә ҡыҙыл һәм йәшел өсмөйөштәрҙән торған ике ҡуш биҙәк, ә сирень төҫөндәге ҡуш ҡусҡар-мөгөҙ биҙәге уларҙы тулыландырып тора. Ҡара ҡаймалағы төрлө төҫтәге ромбтар баластың үҙәген формалаштырған ромблы биҙәктең төҫөнә ауаздаш.



*Ҡуш ромб биҙәк. Миәкә районы Илсеғол ауылы. Г. Мөхәмәтшин һүрәте. 1960*

Ошоға оҡшаш баласты Рәсәй этнография музейына 1957 йылда Миәкә районы Илсеғол ауылында тапшыралар. Алда һүрәтләнгән баластан айырмалы рәүештә, төҫтәре баҙығыраҡ, ҡаймаһы ғына түгел, ромбтар ҙа ҡарараҡ фонға һалынған. Төп биҙәк һәм ҡайма 9 төҫтәге йөндән: ҡыҙыл, һары ҡыҙыл, һары, асыҡ йәшел, күк, зәңгәр, сирень төҫө, шәмәхә, ҡара-алһыу. Ромбтарҙың сите ҡабырғаһына әйләндерелгән өсмөйөштәр менән биҙәлгән. Ҡайма төрлө төҫтәге йондоҙ-ҡар бөртөктәре сылбыры менән биҙәлгән.

*Биҙәктә ромб һәм өсмөйөштәрҙе ҡулланыу. Дәүләкән районы Бураҫғол ауылы. Н. Бикбулатов фотоһы. 1960*

Дим йылғаһының үрендә (Миәкә, Бишбүләк райондары) биҙәкле балаҫ менән буй балаҫ ҡатышып киткән өлгөләр күпләп осраны. Уртала ике ҙур ромб, уны ике яҡлап - өҫтән һәм аҫтан киң генә (25-30 см) ҡайма, ҡайма үҙе тар буйҙар итеп һуғылған. Ҡаймалағы буйҙар төҫө йәһәтенән дөйөм баластың төҫөнә килештереп һайланған.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

✓ ***Мең башҡорттары дөйөм башҡорт тарихында ҙур урын биләй. Мең ырыуы башлығы Ҡәнзәфәр-бей башҡорт ырыуҙарының Рус дәүләтенә ҡушылыуы айҡанлы телгә алына.***



Ил-күл-мең атамаһындағы күл ҡушылмаһы Урта Азия төркиҙәренең этник атамаларында йыш осрай. Төркмәндәрҙең йомуд һәм эрсари ырыуҙарында куль аймағы бар, шундай уҡ атамалы нәҫел линиялары үзбәк, ҡаҙаҡ, тыва, хакас халыҡтарында ла киң таралған.

Меңдәрҙең ҫыба һәм ҡыбау (ҡобау) бүлемдәре шулай уҡ Урта Азия төркиҙәре менән бәйле. Ҡаҙаҡтарҙың ҡыҙылҡорт ырыуында суба, саба этнонимдары бар, ә ҡырғыҙҙарҙың черик ырыуы составында куба аймағы теркәлгән. Куба тамырлы топонимдар һәм гидронимдар Алтайҙан Кавказғаса осрай.

Кырҡөйлө-мең, меркет-мең кырыу бүлемдәре сығышы менән меңдәрҙең төп нәҫеленә ҡарамай. Уларҙың тамғалары ла меңдәрҙең төп тамғаларынан айырылып тора. Ҡырҡ һүҙе ингән этнонимдар Зәрәвшан үзбәктәрендә, ҡырғыҙҙарҙың саруу ҡәбиләһенә ҡараған кырк уул атамаһында, төркмәндәрҙең кыркуйле ырыуында, шулай уҡ ҡаҙаҡтарҙың сары-уйсундары составында, ҡараҡалпаҡтарҙа, нуғайҙарҙа осрай. Ҡайһы бер ғалимдар был этник төркөмдөң ҡасандыр Урта Азияла ҙур урын биләгән усунь дәүләте составында формалашыуын фаразлай. Бында ҡырҡтарҙың ҡатайҙар менән тығыҙ бәйләнештә булыуы ла күҙгә салынып тора. Ҡараҡалпаҡтарҙың ҡырҡ аймағы ҡатай ҡәбиләһенә ҡарай. Ҡырҡөйлө мең ырыуының балға тамғаһы ҡатай тибындағы тамға булып тора. Ҡырғыҙҙарҙың кырк уул ырыуының тамғаһы ла балға тип аталып, ҡырҡөйлө меңдәрҙекенә бермә-бер тап килеп тора - ә уларҙың бөгөнгө төйәктәрен меңәр саҡырым алыҫлыҡ айырып тора. Тимәк, төрлө халыҡтарға ҡараған ошо боронғо ырыу вариҫтарының ҡасандыр ҡара-ҡатай (ҡытай) һәм дулат-табын- усунь этник берләшмәләре составында көн иткән уртаҡ ата-бабалары булған.

Ә меркет-мең башҡорттарының килеп сығышы монголдар менән бәйле булыуына шик юҡ. Рәшид ад-дин (XIII - XIVбб.) меркеттәрҙе монгол исеме аҫтында дан ҡаҙанған халыҡтар иҫәбенә индерә. Төркмән-салорҙарҙың кыркуйле һәм миркит ырыуҙары бер этник берләшмәгә ҡарай. Меркеттәр нуғай, ҡырғыҙ, үзбәк халыҡтары составында ла бар. XIV быуатта меркеттәр Аҡһаҡ Тимер ғәскәрендә хеҙмәт итә. Алтайҙар, телеуттар араһында ла меркет атамалы төркөмдәр була. Монголдарҙың Чжарух тигән өлкәһендә XVII-XVIII быуаттарҙа йәшәгән миркит (моркит) исемле ҡәбилә теркәлгән. Ҡырымда Миркит, Ҡара Меркит, тип аталған географик атамалар бар. Меркеттәр оҙаҡ йылдар дауамында Сыңғыҙ ханға ҡаршы көрәш алып бара. 1201 йылда улар Чжамуха етәкселегендә Сыңғыҙ хан ғәскәре менән яуға сыға, әммә еңелеүгә дусар була. Меркеттәрҙең бер өлөшө Алтай тауҙары тарафтарына китеп, унда йәшәүсе ҡәүемдәргә ҡушыла, ҡалғандары монголдар ҡыҫымы аҫтында Арал буйҙарына, Көнбайыш Ҡаҙағстан далаларына барып сыға, шул тарафтарҙа монголдарҙан ахырынаса тар-мар ителеп, таралып бөтә. Шул дәүерҙә меркеттәр наймандар менән союздаш булып, монголдарға ҡаршылыҡ күрһәтә. Меркет мең башҡорттарының тамғалары найман-ҡатай тамғалары менән бер иш.

XIII быуатта, монголдарҙың көнбайыш походтары башланыу менән, мең ҡәбиләһе лә, ошо тарихи ваҡиғаларҙа ҡатнашып, Саян-Алтай төбәген ҡалдырып, яулап алынған яңы ерҙәргә күсә башлай. Фарсы тарихсыһы Мәхмүт ибн Вәлиҙең (XVII б.) ошо дәүер менән бәйле яҙмаларында меңдәр тураһында ла мәғлүмәт бар. Батый хан, үҙенең кесе туғаны Туҡай-Тимерҙең хеҙмәттәрен баһалап, уның ҡарамағына "каучиндар" (монгол ғәскәренең привилегиялы өлөшө) иҫәбенән булған мең, тархан, ушун, ойрат ҡәбиләләрен тапшыра.

Меңдәр шибанидтар тарихсыһы Үтәмеш хажиҙың (XVI б.) "Сыңғыҙнамә" китабында ла телгә алына. 1312 йылда Тоҡта хан вафат булғас, Алтын Урҙа тәхетен "ҡара кешеләрҙән" булған Баджир Тоҡ-Буға биләй, ул хәйлә менән хандың энеһе Үзбәкте үлтерергә уйлай. Үзбәкте уның арҡадаштары Исатай Кият менән Алатай Сиджут ҡотҡара. Тоғролоҡтарын юғары баһалап, Үзбәк хан уларға айырым олоҫтар бүләк итә, Алатайға шөһрәтле мең ҡәбиләһе йәшәгән ил бирелә.

Аҡһаҡ Тимерҙең ваҡ олоҫтарға бүлгеләнгән Алтын Урҙа дәүләтен берләштереү һәм үҙәкләштереү маҡсатында башлаған яуҙары барышында меңдәр йәшәгән Сығатай олоҫо ла үзенең үҙаллылығын юғалта. Күрәһең, Сығатайҙың һуңғы номиналь ханы Ҡабул шах ваҡытында (1364-1365) Санаҡлы Урҙас бей һәм уның улдары, эҙәрлекләүҙәрҙән ҡасып, Башҡорт ерендә үҙенә яңы төйәк таба. Алтын Урҙа дәүләте тарҡалғандан һуң, XVI быуат аҙаҡтарынаса, мең ырыуы Нуғай Урҙаһы составында ҡала.

Мең ырыуы башҡорт илендә лә абруйлы ҡәүемгә әүерелә, сөнки меңдәрҙең чингизидтар һәм тимуридтар осорондағы дан-шөһрәте дала халыҡтарына күптән билдәле була. Бәлки, шундай хөрмәткә лайыҡ булғанғалыр, мең ырыуы ул замандағы Башҡорт иленең иң затлы ерҙәрен биләп, башҡа башҡорт ырыуҙары менән бер ниндәй бәхәсдәғүәһеҙ йәшәп китә. Тарихсы Ә.Н. Усманов был турала ошолай яҙа: "Мең башҡорттары ерҙәре күсеп йөрөп мал аҫраусы халыҡтар өсөн һирәк осрай торған бай һәм уңайлы тәбиғәт шарттары менән айырылып тора. Бында йәйрәп ятҡан һутлы үләнле далалар урман массивтары менән аралаш. Ағиҙел, Өфө, Дим, Өршәк йылғалары үҙәндәренең киң туғайҙары бик шәп көтөүлектәрҙе хасил итә. Тулы һыулы дала йылғалары һәм күлдәре мал һуғарыу өсөн дә бик уңайлы, улар балыҡҡа һәм ҡош-ҡортҡа ла бай. Дим буйы урмандарында ҡырағай бал ҡорттары, затлы тиреле йәнлектәр ҙә ифрат күп. Меңдәр биләгән территория йәйләү өсөн дә, ҡышлау өсөн дә уңайлы. Ҡыштарын ҡар ҙа сағыштырмаса ҡалын ятмай, яҙҙарын, Башҡортостандың башҡа райондарына ҡарағанда, ер ҙә ҡарҙан иртәрәк асыла".

Мең ырыуы башҡорттары нигеҙләгән ауылдар хәҙерге Әлшәй, Ауырғазы, Бишбүләк, Благовар, Благовещен, Дәүләкән, Иглин, Ҡырмыҫҡалы, Миәкә, Стәрлетамаҡ, Өфө, Шишмә райондарында урынлашҡан. Татарстандың Сарман һәм Туҡай райондарында ла ҫарылымең ырыуы вариҫтары йәшәй, әммә улар совет осоронда билдәле сәбәптәр арҡаһында ассимиляцияға дусар булған.

Һуңғы йылдарҙа уҙғарылған этногенетик тикшеренеүҙәр мең башҡорттарының ирҙәр линияһы буйынса төрлө сығышлы булыуын күрһәтә. Уларҙың составында N1c1M178 гаплотөркөмөнә ҡарағандар байтаҡ. Был генетик төркөм рустар, фин-уғыр (удмурт, мари, хант, манси, венгр) халыҡтарында, яҡуттарҙа йыш осрай. Ғалимдар фаразлауынса, ошо төркөмгә ҡараған кешеләрҙең боронғо ата-бабалары бер нисә мең йылдар элегерәк хәҙерге Ҡытай территорияһынан Төньяҡ Евразия һәм Төньяҡ Европасаға таралып китеп, бик күп халыҡтарҙың генофондын хасил итеүҙә ҡатнашҡан. Шулай уҡ меңдәрҙең байтағы (30%) R1a1-M198 гаплотөркөмөнә ҡарай. Был төркөмгә ҡарағандар Азияның көньяҡ райондарында, Үҙәк һәм Көнсығыш Европала йәшәүсе халыҡтар составында осрай. Меңдәр генетикаһының өҫөнсө гаплотөркөмө - C3-M130 (12%). Ошо төркөмдөң C3-F4002 субклады Төньяҡ Ҡытайҙа, Урта Азияла, Ҡаҙағстанда, Монголияла осрай, ул меңдәрҙең бер өлөшөндә табылды. Тимәк, мең ырыуының сығышында монгол этносына туғандаш булған этник төркөм ҡатнашыуы ысынбарлыҡҡа тап килә.

Мең башҡорттары дөйөм башҡорт тарихында ҙур урын биләй. Мең ырыуы башлығы Ҡәнзәфәр бей башҡорт ырыуҙарының Рус дәүләтенә ҡушылыуы айҡанлы телгә алына. XVII - XVIII быуаттарҙағы башҡорт ихтилалдарында улар бик әүҙем ҡатнаша. Ҡырҡөйлө-мең олоҫо старшинаһы, тархан Әлибай Мырҙағолов, Өршәк-мең олоҫо старшинаһы Ибраһим Мерәҫов, Илекәй-мең олоҫо старшинаһы Илсеғол Таймаҫов, Бәғәнәш-мең олоҫо старшинаһы Рахманғол Яҡупов, Күл-ил-мең олоҫо сотнигы Буҙан Смаков, Сыбы-мең олоҫонан старшина ярҙамсыһы Тура Ишалин 1773-1774 йылдарҙа мең башҡорттарын ихтилалға күтәреүсе етәкселәр була. Шулай уҡ мең ырыуынан сыҡҡан яугирҙар 1812 - 1814 йылғы һуғыш хәрәкәттәрендә ҡатнаша, улар араһында батырлыҡтары өсөн орденмиҙалдар менән бүләкләнеүселәр ҙә була.

Мең еренең иң данлы шәхестәренең береһе - арҙаҡлы башҡорт мәғрифәтсеһе, шағир Мифтахетдин Аҡмулла. Башҡорт милли автономияһы өсөн барған көрәштә Үҙрәкбаш ауылында тыуып үҫеп, хәрби хеҙмәттә генерал-лейтенант дәрәжәһен алған Хажи-Әхмәт Ишбулатов та ҡатнаша, ул 1918 йылда Комуч Халыҡ армияһының Башҡорт корпусы командиры була. 1922 йылда Кесе Башҡортостанға Өфө, Бөрө, Бәләбәй өйәҙҙәрен, Златоуст өйәҙенең бер өлөшөн ҡушып, Оло Башҡортостан төҙөүҙә лә мең башҡорттарының талаптары иҫәпкә алына, сөнки улар ошо талапты 1921 йылда уҡ БАССР Советтарының II съезы адресына тапшыра. Мең башҡорттары дипломат Кәрим Хәкимов, күренекле дин эшмәкәре, ахун Абыҙғилдин Йыһангир, шағир Төхвәт Йәнәби, яҙыусы Әхиәр Хәкимов, ғалим, шағир Рәшит Шәкүр, халыҡ артисы Ғәзим Туҡаев, РФА академигы Альберт Ғәлиев, философия фәндәре докторы, академик Фәнил Фәйзуллин, БР ФА академигы Әнәс Мәхмүтов, дәүләт эшмәкәре Илдар Ғимаев һәм башҡа билдәле йәмәғәт һәм дәүләт эшмәкәрҙәре, арҙаҡлы зыялылары, эшһөйәр ырыуҙаштары менән хаҡлы рәүештә ғорурлана ала.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**

*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

# БАШҠОРТТАР

## Боронғо мәғлүмәттәр

Боронғо халыҡтарҙың йәмғиәт, дәүләт ҡоролошон нығлап өйрәнгән С.Г. Кляшторный боронғо төрки халыҡтарының ил менән идара итеүсе элитаһы дүрт өлөшкә бүленеп, тап улар дәүләт менән идара иткәндәр, тип яҙа. Ошо уҡ фекер Зәки Вәлидиҙең хеҙмәттәрендә лә осрай. Ул ошо дүрткә бүленеш төрки халыҡтарында дәүләт менән идара итеүҙең камил ысулы булып һаналған, тип яҙа. Һундарҙың йәмғиәте дүрт аристократик төркөмдән торғанлығы һәм уларҙың бер-береһе менән ҡоҙаҡоҙағыйлыҡ мәнәсәбәттәрендә булыуҙары тураһында мәғлүмәттәр Ҡытай сығанаҡтарында һаҡланған. Йәғни аристократия тик ошо дүртәүҙең эсендә генә өйләнә алған. Ситтәргә бында үтеп инеү мөмкин булмаған. Тик етди сәйәси сәбәптәр арҡаһында һәм бик һирәк осраҡта ғына был ҡаты ҡанунды боҙорға мөмкин булған. Ошо дүртәү араһында иң-иң затлы һаналғаны эсенән батша (хан) һайланған.

Үҙебеҙҙең тарихҡа әйләнеп ҡайтып баяғы дүртәүгә (бәшнәк, башҡорт, баджан, наукәрдкә) күҙ һалһаҡ, бында ла шул уҡ ҡанундың үтәлешен күрәбеҙ. Бәшнәктәр баяғы дүртәү араһында батша биргән, ә башҡорт өлөшө ғәскәр менән етәкселек итер булған. Бәшнәктәр араһында иң-иң затлылары ҡаҙнылар, тик улар араһынан батша һайлағандар, - тиелә көнсығыш сығанаҡтарында. Ә башҡорттар иһә ғәскәр менән етәкселек иткәндәр. Шуның өсөн дә беҙҙең фольклорҙа, шәжәрәләрҙә гел бейҙәр телгә алына. Бей урыҫтарҙың князь тигәне менән тап килә һәм ғәскәр менән тап улар етәкселек иткәндәр.

Ошо дүртәү етәкселек иткән дәүләт Арал диңгеҙе эргәһендә еңелгәндән һуң, бәшнәктәрҙең бер өлөшө Уралға башҡорттар араһына килеп һыйына, ә күпселеге, шул иҫәптән башҡорттарҙың көньяҡтараҡ йәшәгән бер өлөшө тәүҙәрәк Яйыҡ менән Иҙел йылғалары араһына сигенәләр, аҙағыраҡ Ҡара диңгеҙ буйҙарына килеп сығып, бая үрҙәрәк Византия, славяндар менән бәйле телгә алынған ваҡиғаларҙа ҡатнашалар. Аҙағыраҡ уғыҙҙарҙың көнбайышҡа күсенеүе арҡаһында, ә унан да һуңғараҡ осорҙа ҡыпсаҡтарҙың ҡыҫымынан бәшнәк-башҡорттар сигенә-сигенә хәҙерге Венгрияға барып етәләр, шунда төпләнеп, улар мадьяр халҡын формалаштырыуҙа әүҙем ҡатнашып, улар араһында эреп юҡ булалар. Европаға барып еткән бәшнәк-башҡорттарҙың бер өлөшө Венгрияның көнсығышында төпләнеп унда йәшәгән славян ҡәбиләләре менән буталып, ҡушылып славян теленә күсеп бөтөп, әммә ислам динен һаҡлап ҡалып яңы бәшнәк (босняк) тигән халыҡты формалаштыралар. Хәҙерге ислам динен тотҡан босняктар Европаға барып етеп, унда төпләнгән ана шул бәшнәк-башҡорттарҙың вариҫтарылыр.

Көнсығыш (ғәрәп, фарсы) телдәре буйынса ҙур белгес, үзбәк ғалимы Шәмсетдин Камолетдин Өфөгә бер килгәнендә ошо бәшнәк-башҡорттарҙың бер өлөшөнөң уғыҙҙарҙың ҡыҫымынан ҡасып Каспий диңгеҙенең көньяҡ ярҙарына сигенеүҙәре, унда хәҙерге Мазандаран тигән ерҙә дәүләт ҡороп йөҙ йылдан ашыу йәшәүҙәре, әммә сәлжүктәрҙең унда барып етеүҙәре арҡаһында, ул ерҙәрҙән дә китергә мәжбүр булып, хатта Испанияның Андалусия яҡтарына барып етеүҙәре, унда дәүләт ҡороп йәшәп алыуҙары, тик католиктарҙың ҡыҫымынан һуң диндәрен алыштырып урындағы халыҡ эсендә эреп юҡ булыуҙары тураһында һөйләгәйне. Был ваҡиғалар тураһында һөйләп ултырғандан һуң Шәмсетдин һеҙҙә был ваҡиғалар менән берәй ғалим ҡыҙыҡһынамы, өйрәнәме, тип һорашып ултырҙы. Минең былар тураһында унан башҡа берәүҙән дә ишетмәүемә ул аптырап, көнсығыш телдәре буйынса белгестәрегеҙ юҡмы ни, нишләп өйрәнмәйһегеҙ, неҙ бит бик боронғо мәҙәниәтле халыҡ, тип беҙҙең халыҡҡа бик юғары баһа бирҙе.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ, этнограф.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Беҙ бик уникаль милләт. Был бер генә лә арттырыу түгел. 89-сы тапҡыр баҫтырылғас, 20-се йылда тағы бер күтәрелеш була (90-сы), унан 30-сы йылдағыһында ла ҡорбандар аҙ түгел (91-сене). Беҙ бына шундайбыҙ.*

ЯҘЫУСЫ МЕНӘН ӘҢГӘМӘ

**Башҡортостан Республикаһының 100 йыллығына арналған баҫмаларҙың иң сағыуҙарының береһе ул - "Шаҡай бураны". Күренекле яҙыусыбыҙ Ғәлим Афзал улы Хисамовтың хеҙмәт емеше. Тарих биттәрендәге башҡорт халҡының азатлыҡ өсөн көрәшенең бер этабы, милләткә әллә күпме яңылыҡтар һәм юғалтыуҙар алып килгән яңы башланғыс, беҙҙең өсөн быуаттар буйына актуаль булған мәсьәләләр, проблемалар тураһындағы әңгәмә. Рух һәм милли характер тураһындағы, идеялар һәм шәхитлек тураһындағы, батыр психологияһы һәм илһөйәрлек фәлсәфәһе тураһындағы... Бына ошоларҙы еткерергә теләй уҡыусыларына Ғәлим ХИСАМОВ.**

# ТӨРКИ ДОНЪЯҺЫНДА...

## һаман да унан оло ғалим юҡ

**Иң тәүҙә әҫәрҙең атамаһын асыҡлап китәйек әле: нимә аңлата ул "Шаҡай бураны"?**

- Шаҡай - ул боронғо төрки календары буйынса ҡыштың иң һыуыҡ айы февралгә тура килә. Йәғни, "шаҡылдап" торған туң, һалҡын, ыжғыр ай. 23 февралдә инһә бөтә Рәсәй буйынса революция тоҡанып китә һәм был хәл-ваҡиғалар образлы ла, ысын мәғәнәһендәге лә буран була. Рәсәй эсенә ингән барлыҡ милләттәргә лә ҡағыла ул, ә инде беҙҙең тормошҡа айырыуса көслөрәк булып килеп инә. Әҫәрем был бурандың нисек итеп кешеләрҙең мейеһенә үтеп инеүе, нисек итеп күңелдәрҙе йылытыуы һәм йән аямай алға ынтылырға мәжбүр итеүе тураһында.

**Әҫәрҙә барған хәл-ваҡиғаларҙы һеҙ шул заман кешеһе күҙлегенән анализлайһығызмы, әллә автор бөтөн шул тарихтың ағышын белгән бөгөнгө кешеме?**

- Ҡатмарлы һорау... Был тәңгәлдә беҙ үҙ-үҙебеҙ менән намыҫлы булырға бурыслы һәм шунлыҡтан әҫәрҙе мин шул заман күҙлегенән генә яҙҙым, тип раҫлау ҙа дөрөҫ булмаҫ. Нисек кенә әйләндерһәк тә, беҙ ул тарихтың ҡайһылай башланғанын һәм ни рәүешле бөтәсәген беләбеҙ. Әлбиттә, мин геройҙарымдың уй-фекерен һәм уларҙың ваҡиғалар ағышына ҡарата мөнәсәбәттәрен шул мәл һәм шул заман күҙлеге аша бирергә тырыштым. Шулай уҡ бер нәмәне лә биҙәмәнем дә, үҙгәртмәнем дә, арттырманым да, кәметмәнем дә. Берәүҙе лә аҡларға ла, ҡараларға ла ынтылманым. Ысынында, тарих беҙҙән аҡлау ҙа, аңлау ҙа талап итмәй ул. Ул нисек булған - шулай булған. Мин бары тик ҡайһы бер идеяларҙы ғына аңлатып китергә теләнем. Мәҫәлән, башҡорттоң шул Шаҡай буранына ҡалҡыныуы, 1557 йылдан алып иҫәпләгәндә, 89-сы күтәрелеше була! Бер генә милләт өсөн был бик, бик күп.

**Ғәлим Афзал улы, һеҙ тарихты төплө белгән, ихтилалдар мәсьәләһен сәйәси генә түгел, ә фәлсәфәүи яҡтан да өйрәнгән кеше. Бына, башҡорт батша власына ҡаршы 89 тапҡыр баш күтәргән, тинегеҙ. Баш күтәргән һайын улар аҙаҡтан баҫтырылған, карателдәр тарафынан ҡырылған, ҡанға батырылған. Әммә нисәлер йылдан шул уҡ юлды яңынан ҡабатлаған. Һәм тағы... Һәм тағы. Был инде ниндәйҙер идея сиктәренән сығып, үҙ-үҙеңде юҡҡа сығарыу уҡ булып китмәйме?**

- Беҙ бик уникаль милләт. Был бер генә лә арттырыу түгел. 89-сы тапҡыр баҫтырылғас, 20-се йылда тағы бер күтәрелеш була (90-сы), унан 30-сы йылдағыһында ла ҡорбандар аҙ түгел (91-сене). Беҙ бына шундайбыҙ. Был үҙенсәлек башҡорттарҙа һәм Кавказдың бер-ике халҡында ғына бар. Бөйөк рус халҡында ла, туғандаш халыҡтарыбыҙҙа ла, ҡайһы бер яуҙарҙа беҙҙең менән булған фин-уғырҙарҙа ла әлеге үҙаллы йыйналып яуға күтәрелеү, бер орандан ҡапыл күтәрелеп ҡуба алыу сифаты юҡ. Был характер һыҙаты хаҡында минең дә күп уйланғаным булды. Халыҡ бит наҙан булмаған, хәтерһеҙ булмаған, аҙағынан ни булырға мөмкинлеген дә аңлаған, әммә һаман-һаман шул аҙымға барған. Тимәк, беҙҙең милләт ҡанында ул шәһитлек.

**Нисәнсе йылдарға тиклем Әхмәтзәки Вәлиди исеме беҙҙә тыйылған тема булды?**

- Туҡһанынсы йылдарға тиклем. Башҡорт халҡында тыйылған исемдәр һәм темалар аҙ булмай ул. Мәҫәлән, Салауат Юлаев кеүек ихтилал башлыҡтары, батырҙар һәм уларға бәйле тарихтар, йырҙар, риүәйәттәр - улар барыһы ла үҙ заманында тыйылған була. Тыйылып ҡына ҡалмай, уларҙың ваҡиғаһы кәрәкле юҫыҡҡа үҙгәртелеп, яңылыш мәғлүмәтле булып китә. Тик халыҡ хәтере бит йыуып уңдырыла торған әйбер түгел. Ул нисек кенә күңгән төҫ яһаһа ла, үҙ хәкиәтен белә һәм иҫләй. Шуның кеүек, беҙҙең атай-әсәйҙәр ҙә Әхмәтзәки Вәлидиҙең кемлеген белде һәм хәтерләне. Улар уны бер ваҡытта ла ләғнәт менән телгә алманы. Өндәшмәне, исемен йәшерҙе, әммә әрләмәне, ғәйепләмәне. Әгәр ысынлап насар уйҙа булһалар, бер әйтмәһәләр, бер әйтерҙәр ине бит. Ниндәйҙер гәзиттә ил сәйәсәте ағымында булған әҙәмдәр уны һүгә, ә ябай халыҡ шуны уҡый ҙа ситкә һала, тик был әргә ҡушылмай. Сөнки уның үҙ фекере, үҙ уйы бар. Һәм был бөгөн дә шулай бит, халыҡтың ниәте ил өҫтөндә осоп йөрөгән сәйәсәт менән бер нисек тә тап килмәй.

**Был оло шәхестең иҫтәлектәрен, яҙмаларын өйрәнгән ваҡытта уның хис-тойғоларын һиҙҙегеҙме? Нисек итеп тойҙоғоҙ уның булмышын? Ниндәйерәк кеше итеп ҡабул иттегеҙ?**

- Уңайһыҙ булһа ла әйтәйем, яҙған ваҡытта әллә нисә ултырып иланым... Уның идеялары менән ярһыу ҙа, һоҡланыу ҙа, ҡуша һыҙланыу ҙа, йәлләү ҙә, һағыштарын бүлешеү ҙә тыныс ҡына ҡалдыра алмай ине. Бик оло ғалим була ул. Һәм төрки донъяһында бөгөн дә тарих өлкәһендә унан бөйөгөрәк белем эйәһе юҡ әле. Быны беҙ түгел, ә төрки донъяһы танып тора. Иран, Германия илдәре һаман да уның хеҙмәттәрен беренсе урында тота. Шулай итеп, ғилем киңлегендә уны танымау мөмкин түгел.

Кеше булараҡ мин уны бик көслө ихтыярлы, әхлаҡлы ир итеп тойҙом. Һүҙен һәр ваҡыт тотҡан һәм үтәгән. Миҫал итеп әйткәндә, ул Төркиәгә килгәс, егерме йыл буйына Башҡортостанда ҡалған ҡатынын көтә. Уға биргән вәғәҙәһен боҙа алмай. Һөйләшеүҙәре буйынса, ҡатыны ла ниндәйҙер арауыҡтан һуң юлға сығырға тейеш була. Тик бында хәлдәр бөтөнләй мөшкөлләнеп китә. Был осраҡта Вәлиди көрәште тик ирҙәр араһында ғына тип яңылыша, репрессиялар ҡатындарҙы ла, балаларҙы ла, ҡарт-ҡороно ла аяп тормай. Аҙаҡ ҡына, инде барлыҡ өмөттәре өҙөлгәс, олоғайып ҡына өйләнеп ҡуя.

**"Шаҡай бураны"н яҙғанда һеҙ ошо ваҡиғаларға бәйле барлыҡ документтарҙы ла өйрәнгәнһегеҙ бит инде. Әхмәтзәки Вәлиди тураһындағы ниндәй уйҙырмаларҙы кире ҡаға алаһығыҙ?**

- Мәҫәлән, Вәлиди халыҡтан йыйылған алтын менән сит илгә ҡаса, тигәнде. Эйе, алтын йыйыла, Башҡорт хөкүмәтенең алтыны була. Әммә ул алтын тулыһынса ғәскәр туплауға һәм уны ҡоралландырыуға, аҫрауға китә. Ғәскәр һынлы ғәскәрҙе буштан барлыҡҡа килтереп ҡарағыҙ һеҙ! Һуғыш ул, ғөмүмән, аҡсаһыҙ алып барып булмай торған нәмә. Һәр хәлдә, сит илгә Вәлиди бер ниндәй ҙә алтын менән сыҡмай.

Мулла ҡыҙын ҡурҡытып ала ла, аҙаҡ ташлап китә, тип тә яҙҙылар. Был уйҙарманы ла кире ҡағам. Хажмөхәмәт хәҙрәттең ҡыҙы Нәфисә менән Әхмәтзәкиҙе 1905 йылда уҡ йәрәштерәләр. Ләкин уларҙың өйләнешеп ҡуйыуы бик оҙаҡҡа һуҙыла. Төрлө сәбәптәр сығып, Әхмәтзәки уҡырға китеп һәм беҙгә билдәле башҡа сәбәптәр менән улар бары тик ун туғыҙынсы йылда ғына ҡауыша ала. Әхмәтзәки ҡырҙа саҡта Нәфисәне һоратып килеүселәр була, әммә ул барыһын да кире ҡаға. Аҙаҡ бергә йәшәй башлағас, ҡатынын ул Мәскәүгә лә, Баҡу ҡалаһына ла, Урта Азияға ла бергә алып китә. Шул яҡта бер балалары тыуып үлә. Үҙенә шул яҡтан сит илгә китергә кәрәк булғас, Нәфисәне хәүефһеҙерәк урынға - тыуған яғына ҡайтарып торорға булып ҡына яңылыша ул...

Өсөнсө бер ялған - Вәлиди фашистик Германияға хеҙмәт иткән, тигән һүҙ. Һуғыш мәлендә Германияла башҡорт һәм татар әсирҙәре бик күп була һәм Вәлидигә бына ошо халыҡ менән эшләргә тәҡдим итәләр. Әсирҙәрҙе өгөтләп, аңлатып баш һалдырыу була уның бурысы. Әммә ул яҙма рәүештә был тәҡдимдән баш тарта, был документ архивта һаҡлана. Ул был документта "минең ҡулымдан килмәй торған, мөмкин булмаған хәл" тип яҙа. Һәм был эште Рәсәйҙең Хәүефһеҙлек буйынса федераль советы (ФСБ) ағзалары ла тикшереп, ыңғай ҡарар сығарған.

**Бөгөн беҙҙең халыҡ Вәлиди кеүек шәхестәрен баһалап етәме, нисек уйлайһығыҙ?**

- Ошо урында хатта Вәлидиҙең яҙмышының шулай булыуы, уға ситтә йәшәп ижад итергә тура килеүе лә беҙҙең милләт өсөн тик файҙаға ғыналыр тием. Нисек кенә ҡаты булмаһын был фекер, бөгөнгө күҙлектән ул дөрөҫ. Бында ҡалһа, ул сама белемле ғалимыбыҙҙы оҙаҡ йәшәтмәҫтәр ине, ә сит илдә ул башҡорт халҡы һәм башҡа төрки халыҡтар өсөн хеҙмәт итеп, оло ҡомартҡылар ҡалдыра.

**Һеҙҙең әҙәби хеҙмәт башлыса тарихҡа бәйле. Ни өсөн ижадтың был ауыр өлөшөн һайланығыҙ?**

- Тарихҡа һөйөү миңә атайымдан бирелгән. Ул егерме өсөнсө йылдарҙа Юныс байҙың ҡыҙына - әсәйемә өйләнә. Унан Ырымбурҙа башҡорт йәштәрен уҡыталар, имеш, тип ишетеп, шунда уҡырға барырға теләй. Тик атаһы ҡаршы төшә. Шунда ул ҡатыны менән генә килешә лә, төндә тәҙрә аша ҡасып сығып, уҡырға юллана. Тик уҡыуын тамамлай алмай, ауылда ҡалған ҡатыны, атаһы уға был ниәтен ослорға бирмәйҙәр. Шулай ҙа алып өлгөргән белеме менән ауылда ғүмер буйы уҡытыусы булып эшләй, һуғышҡа барып биш йыл хеҙмәт итеп ҡайта. Шул атайым мине ҡайҙа алып йөрөһә лә, ер-һыу атамаларын аңлатып, уларға бәйле тарихтарҙы һөйләп, риүәйәттәр бәйән итеп, минең күңелемдә халыҡ тарихына ҡарата һөйөү, хөрмәт тәрбиәләне.

Әлеге китабымда һөйләнгән хәлдәр минең тыуған районым Көйөргәҙе районының эсендә бара. Әсәй әйтә торғайны: әле ҡыҙылдары, әле аҡтары, әле йәшелдәре килеп баҫа. "Кем икән ул йәшелдәр?" тип уйлайым шул саҡта. Граждандар һуғышының ваҡиғалары тураһында бала саҡтан белеп үҫтем. Ауыл тирәһендә окоптар һаҡлана ине әле. Беҙ шунда уйнай инек. Тик Әхмәтзәки Вәлидиҙең кемлеген белмәнем. Был тыйылған тема булды. Унынсыны тамамлағас, райондың башҡорт гәзитендә эшләнем. Шунда саҡта архивта соҡоноп ултырғанда латинса сыҡҡан гәзиттәргә юлыҡтым һәм шунда Әхмәтзәки Вәлидиҙең исемен уҡынным. Унда уны нисек кенә һүкмәйҙәр, нисек кенә хурламайҙар ине. Кемдәрҙер хаҡында "Зәкиҙең хеҙмәткәре, Зәкиҙең йомошсоһо, Зәкиҙең эйәрсәне" тип тә яҙалар ине. Бик аптырап, бергә эшләгән Солтанов тигән ағайҙан "Кем ул Зәки?" тип һораным. Шунда ул миңә ипләп кенә аңлатып бирҙе. Шунан алып минең был шәхескә ҡарата ҡыҙыҡһыныуым бермә-бер артты. Университетта уҡығанда ғәрәп графикаһын өйрәнгәс, ғәрәп телендә сыҡҡан баҫмаларҙы аңлап уҡый, материалдар туплай башланым. Ә инде бынан егерме йылдар әүәлерәк был эшкә нығлап тотондом, төрлө ҡала һәм илдәрҙәге архив документтарына, китаптарына мөрәжәғәт иттем. Партия комитетында эшләгән осорҙа беҙҙең өсөн ябыҡ архив мәғлүмәт булманы тиерлек һәм ошонан файҙаланып, мин Вәлиди һәм башҡа шәхестәребеҙ тураһында байтаҡ материалдар тупланым. Күреүегеҙсә, китап - алдығыҙҙа. Уның дауамы булған "Шаҡай бураны - 2" романы йәки "Башкирпомощь" "Ағиҙел" журналында донъя күрҙе. Тик Вәлиди яҙмышы бының менән генә тамамланмай әле. Уның тураһында яҙырлыҡ мәғлүмәттәр ҙә, ҡыҙыҡлы яңылыҡтар ҙа, сәбәптәр ҙә бик күп.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА әңгәмәләште.**

✓ *Берәүҙәр сараһыҙлыҡтан бурысҡа батһа, икенселәр ял итеүгә, кейем-һалымға, алтын һәм тундарға, машинаға булған нәфсеһен тыя алмайынса, банктар "ҡоллоғона" эләгә.*



ИҠТИСАД МӘКТӘБЕ

# БАНКРОТЛЫҠ - бурыстан ҡотолоуҙың бер әмәле

**"Кредит", "займ", "ипотека" кеүек күренештәр бөгөнгө йәшәйешебеҙгә ныҡ үтеп ингән. Бер кредит алып ҡайтарыу мөмкинлеге таба алмайынса, уны ҡаплау өсөн икенсе, өсөнсө займдар алып бурыс һаҙлығына батыусылар һаны бик күп. Был ауыр хәлдән ҡотолоуҙың төрлө юлын эҙләй кеше. Шуларҙың береһе - "Банкротлыҡ тураһында"ғы закон, тип билдәләй хоҡуҡ белгестәре. Күп һөйләнелгән, әммә барыбер тулы кимәлдә аңлашылып бөтмәгән закон тураһында һәм уға нигеҙләнеп ни рәүешле бурыстан ҡотолорға мөмкин булыуын юрист Радик Йәһүҙә улы САЛАУАТОВ аңлата.**

**➔ Иң беренсе "банкротлыҡ" төшөнсәһенә аңлатма бирәйек.**

- Банкротлыҡ - физик йәки юридик шәхестең кредиторҙарға булған бурысын түләй алмауы сәбәпле, законға ярашлы процедуралар үтәп, финанс хәлен еңеләйтеү ысулы. Рәсәйҙә "Банкротлыҡ (мөлкәтһеҙлек) тураһында"ғы закон күптән ғәмәлдә. Ләкин физик шәхестәргә ҡағылышлы бүлектең эшмәкәрлеген тулы кимәлдә тәьмин итеү мөмкинлеге булмау сәбәпле, был өлөшө әлегә тиклем "эшләмәне". 2015 йылға тиклем банкротлыҡ тураһындағы эштәрҙе дөйөм суд ҡарай ине. Ләкин судьяларға финанс мәсьәләгә ҡағылышлы эштәрҙе ҡарау ауырға төштө, сөнки кредиттың процент һәм штрафтарын дөрөҫ иҫәпләү, аҡсаға бәйле башҡа аспекттарҙы аңлау еңел түгел. Шуға күрә законға үҙгәрештәр индерелеп, ул 2015 йылдың 1 октябренән тулы кимәлдә, йәғни юридик һәм физик шәхестәр өсөн дә, эшләй башланы.

**➔ Банкротлыҡ аша бурыстарҙан тулыһынса ҡотолорға буламы?**

- Банкротлыҡтың маҡсаты - кешене бурысынан азат итеү. Ләкин был "судҡа мөрәжәғәт иттең дә, бурыстан ҡотолоп та ҡуйҙың", тигән һүҙ түгел. Ниндәй осраҡта ла, бурысты ҡайтарып биреүҙең төрлө юлдарын барлап, кредиторҙарға аҡсаларын тулыһынса йәки өлөшләтә түләтәләр. Бының бер нисә юлы бар. Арбитраж судья, судҡа ғариза менән бергә тапшырылған бөтә документтарҙы тикшереп, бурысты ни рәүешле түләргә кәрәклеген билдәләгән ҡарар сығара. Был бурыслының мөлкәтен һатыуҙан килгән аҡса менән бурысын ҡаплау, займды реструктуризациялау йәки ике яҡты ла ҡәнәғәтләндергән башҡа дөйөм бер ҡарарға килеү булырға мөмкин. Аныҡлап әйткәндә, әгәр ҙә бурыслының финанс хәле ай һайын банкка ниндәйҙер күләмдә аҡса түләп барырлыҡ тип табылһа, уның бурысы реструктуризацияланa, йәғни займ ҡайтарыу ваҡыты оҙайтылып, айлыҡ түләү дәүмәле кәмей йәки срок шул уҡ ҡалып, түләү суммаһы ҡыҫҡартыла. Шул рәүешле бурыс яйлап ҡайтарыла.

Әгәр кешенең килеме булмаһа, уның мөлкәтен һатып бурысын ҡаплайҙар. Тик был осраҡта ла кешенең берҙәнбер иҫәпләнгән торлағына (әгәр ул залогта йәки кредитта булмаһа), төп эшмәкәрлек өсөн кәрәк автомобиленә, килем алыу өсөн ҡулланған компьютерына, дәүләт наградалары һәм премияларына, шулай уҡ минималь донъяуи талаптарын тәьмин итеүҙе күҙаллаған мөлкәтенә теймәйҙәр. Һатырын һатып та мөлкәте бурысын тулыһынса ҡаплауға етмәгән осраҡта ғына ҡалған өлөшөн ғәмәлдән сығаралар. Шулай уҡ һатырлыҡ бер нәмәһе булмағандарҙың да бурысы юйыла. Тимәк, банкротлыҡ аша бурыстарҙы тулыһынса йәки өлөшләтә ябырға йәки бөтөнләй ҡотолорға була.

**➔ Бурыс нисә һум булған осраҡта банкротлыҡ эшен ҡуҙғатырға мөмкин?**

- Аныҡ билдәләнгән сумма юҡ. Ләкин законға ярашлы физик шәхестең банкротлыҡҡа ҡағылышлы йөкләмәһе һәм хоҡуғы бар. Мәҫәлән, бурысы 500 мең һум һәм унан күберәк булып, уны 90 көн дауамында түләмәһә, кеше үҙен "банкрот" итеп таныуҙарын һорап, арбитраж судҡа мөрәжәғәт итергә тейеш. Әгәр ҙә бурыс 500 мең һумға етмәй икән, теләге булһа ғына процесты башлап ебәрә ала. Ләкин закондың әҙ ваҡыт эшләүе ҡайһы бер ҡытыршылыҡтарға килтерә. Мәҫәлән, миллионлаған һум бурысы булып та, йылдар буйы түләй алмай йөрөүселәр араһында үҙҙәрен "банкрот" тип иғлан итергә тырышыусылар юҡ тиерлек. Ә закон буйынса улар мотлаҡ быны эшләргә тейеш. Шулай уҡ банкка 100 мең һум кредитын ҡайтара алмайынса коллекторҙарҙан ҡасып йәшәргә мәжбүр булыусылар ҙа был процедураны башларға ҡыймай. Ғөмүмән, "банкрот" һүҙе күпселек өсөн негатив йәһәттән сағылыш таба, сөнки беҙҙә халыҡ хоҡуҡы һәм иҡтисади яҡтан белемһеҙ һәм ҡануниәт тураһында мәғлүмәтһеҙ. Кредиттар менән бәйле банкротлыҡ эштәре әүҙемләшә барһа ла, коммуналь түләүҙәр һәм штрафтар буйынса бөтөнләй юҡ тип әйтергә лә була.

**➔ Эш барышы тураһында мәғлүмәт тә артыҡ булмаҫ, моғайын.**

- Банкротлыҡ процесын башлау тураһында уйлап беҙгә килеүсегә иң тәүҙә бушлай консультация үткәрәбеҙ. Әгәр ҙә ул артабан беҙҙең менән эшләргә ҡарар итһә, юридик хеҙмәттәр күрһәтеүгә килешеү төҙөйбөҙ ҙә Арбитраж судҡа ғариза биреү өсөн документаль база йыйыу эшенә тотонабыҙ. Кәрәкле документтарҙы әҙерләп бөткәс, судҡа ғариза тапшырыла. Суд барышында бөтә документтар ҙа тикшерелеп, бурыслыны "банкрот" тип таныу йәки уға был статусты биреүҙән баш тартыу тураһындағы ҡарар сығарыла. Бер эш кәмендә 8-9 ай ваҡытты ала.

**➔ Әйткәндәй, кешегә банкротлыҡ аша үтеү күпмегә барып төшә?**

- Һәр бер кеше үҙаллы документтарын йыйып, ғариза яҙып, Арбитраж судҡа тапшыра ала. Ләкин барыһының да бындай мөмкинлеге юҡ, сөнки йә ваҡыт яғы тар, йә хоҡуҡ өлкәһенең бөтә нескәлектәрен дә белеп бөтмәй. Шуға күрә ошо өлкәлә үҙ хеҙмәттәрен тәҡдим иткән юристар һәм финанс идара итеүселәр күп һәм уларҙың хаҡтары ла төрлөсә. Ғөмүмән, аныҡ һандар юҡ. Барыһы ла эшләнгән эштең күләменән сығып баһалана. Дөйөм алғанда, был процедураны үтеү кәмендә 25-30 мең һумға барып баҫа. Әлбиттә, мәҫәлән, 100 миллион һум менән 200 мең һум бурыстың осона сығыу араһында айырма ҙур. Билдәле, хаҡтары ла күпкә айырыласаҡ. Шуға күрә бында һәр осраҡ буйынса айырым ҡарарға кәрәк.

Ҡайһы берҙә бөтә эштәр тамамланғас та хеҙмәтебеҙ өсөн түләүҙе оҙаҡ көтөргә тура килә, сөнки кешенең аҡсаһы булмай. Ләкин барыһының да хәленә инеп мөмкинлеге булып түләй алғанса көтәбеҙ. Шул уҡ ваҡытта был эштәрҙе бөтөнләй буш та эшләй алмайбыҙ, сөнки ул беҙҙең төп эшебеҙ һәм ғаиләбеҙҙе тәьмин иткән килем сығанағы.

**➔ Бындай рәсми статустың ниндәй ыңғай һәм кире яҡтарын билдәләр инегеҙ?**

- Ыңғай яғына килгәндә, банкротлыҡ законлы нигеҙҙә күтәргеһеҙ бурыстан ҡотолоу мөмкинлеге бирә. "Банкрот" тип танылғандан һуң бурыс "туңдырыла", йәғни уға пени һәм штрафтар өҫтәлмәй. Кеше кредитор һәм коллекторҙарҙың баҫымынан ҡотола. Реструктуризация ла ғаиләнең финанс хәленә ыңғай йоғонто яһамай ҡалмай. Әйткәндәй, банкротлыҡты бурыслы кеше үлгәндән һуң да эшләргә була. Был уның вариҫтарын бурыс йөкләмәһенән азат итә.

Мөлкәтһеҙ ҡалыу, "банкрот" тип табылғандан һуң биш йыл дауамында бер ниндәй ҙә кредит ала алмау һәм ошо эште алып барған юрист һәм финанс идара итеүсенең хеҙмәтен түләүҙе әлеге процестың кире яғына индерергә булалыр. Беҙгә мөрәжәғәт итеүселәр араһында ипотекаға алынған фатир бурысынан ҡотолоу мөмкинлеге менән ҡыҙыҡһыныусылар байтаҡ. Был осраҡта банкротлыҡ процедураһын башлау файҙаһыҙ, тип әйтер инем, сөнки фатир банкта залогта булыу сәбәпле, уның мөлкәте тип иҫәпләнә һәм ул фатир менән бурыслы бер нәмә лә эшләтә алмай. Ипотеканы һәм шулай уҡ автокредитты ла аҡса табып түләргә генә ҡала.

**➔ Бөгөнгө көнгә был законға таянып бурысынан ҡотолғандар һаны күпме?**

- Өс йыл эсендә бурыстарынан ҡотолоу процесын бөтә ил буйлап 69 меңдән ашыу кеше башлаған. Был күрһәткес бик түбән, сөнки белгестәр иҫәпләүенсә, Рәсәйҙә банкрот итеп һанарлыҡ кешеләр һаны 700 меңдән ашыу. Ә законға ярашлы законлы нигеҙҙә бурыстарынан азат булыусыларҙың иң күбе Мәскәү (1554) һәм Мәскәү өлкәһендә (1209) теркәлгән. Унан Санкт-Петербург ҡалаһы (959) һәм Башҡортостан (880) килә.

Беҙҙең компания аша инһә ошо йылдар эсендә 40-тан ашыу кеше банкротлыҡ процедураһын үтеп, бурыстарынан ҡотолоп, таҙа биттән яңы тормош башланы.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Ағымдағы йылдың беренсе кварталы һөҙөмтәләре буйынса Рәсәй халҡының банктарға һәм башҡа төрлө финанс структураларға булған дөйөм бурысы 15,444 (!) триллион һум тәшкил иткән. Алдағы йылдың ошо уҡ ваҡыты менән сағыштырғанда бурыс күләме 23,3 процентҡа артҡан. Был нимә тураһында һөйләй? Ил халҡы, эш хаҡтарының кәмеүенә ҡарамаҫтан (был хаҡта Росстат белдерә), кредит һәм займдар алыуын дауам итә. Берәүҙәр сараһыҙлыҡтан бурысҡа батһа, икенселәр ял итеүгә, кейем-һалымға, алтын һәм тундарға, машинаға булған нәфсеһен тыя алмайынса, банктар "ҡоллоғона" эләгә. Ниндәй осраҡта ла, иңдә ауыр йөк булып ҙур бурыс ятҡанда эштәр бер нисек тә алға китмәй. Тимәк, "Юрғанға ҡарап аяҡ һуҙырға" өйрәнеү бөгөнгө йәмғиәт алдында торған тәүбурыстарҙың береһе.**

**Гөлназ САФУАНОВА**
**әңгәмәләште.**

**✓ *Уның өсөн байрам - улы ҡайтҡан! Әрменән! Тик бына ауылдаштары, туғандары алдында ҡупайып күрһәтергә хәрби кейеме генә юҡ. Булмауы хәйерле. Байрас әйтеп һалды бит. Һалдат кейемендәге егеттәрҙе поезда үлтергәндәрен.***

Вәсилә өсөтәл түрендәге улынан мәжлес бөткәнсә күҙен алманы. Кисә генә ҡайтты бит ул. Кисен. Футболкала, салбарҙа. Аяғында кроссовкалар. Поезда бергә килгән иптәшенә булған ғына аҡсаһын биреп ебәргән. Ярай, иң мөһиме - иҫән-һау. Иң мөһиме - эргәлә. Ҡунаҡҡа бармайым, тип ҡырт киҫһә лә, нисектер, аҙаҡ ризалашты. Ана ул - ҡап-ҡара, яры ла һөйәк. Өрмәгән ергә ултыртмайҙар, өф итеп торалар, ә уның иғтибары ла юҡ. Үҙе бер донъяла һымаҡ. Быяла һауытҡа ингән дә, бер кемде лә күрмәй, бер кемде лә ишетмәй. Кеше шулай танымаҫлыҡ булып үҙгәрер икән...

Эргәһендәге Миңлеханы ҡатынына әллә нимәләр һөйләп көлдөрөргә маташты. Тәрилкәһенә төрлө турамалар тултырҙы. Алдына емеш-еләк өйҙө. Улының да, әсәнең дә тамағына аш бармағас, ни хәл итәһең!

Вәсилә таралышыр алдынан шау-гөр килгән кешеләр араһына инә һалып, гөпөлдәтә баҫып бейергә керешкән Миңлеханға әүрәгән арала, улы Байрастан күҙ яҙлыҡтырҙы. Инде берәүҙә лә тәүҙә ҡәҙерле ҡунаҡ иттереп түргә мендереп ултыртылған һалдат ҡайғыһы юҡ ине. Әсәнең йөрәге жыу итеп ҡалды. Күңелен хафа, шом биләне. Ишек алдында тәмәке тартҡан ирҙәр араһында ла юҡ. Ярай, ҡайтҡандыр, тип үҙен тынысландырып маташты ул.

Байрас ысынлап та ҡайтып, ҡапҡа төбөндәге эскәмйәлә рәшәткәгә һөйәлеп ултыра ине. Башын күтәреп, төпһөҙ күк йөҙөнә баҡҡан. Ай яҡтыһында уның йөҙө тағы ла шомлораҡ күренә. Миңлехан:

- О! Улым! - тип эйелеп ҡосаҡлайым тигәнсә, уның өҫтөнә ауҙы. Һикереп торған Байрас атаһын бер секундта елтерәтеп, һелкетә ултыртып ҡуйҙы. Шаңҡыған ир бер нәмә лә аңламай ҡалды.

Вәсилә тамаҡ төбө менән:

- Бар, балам, йоҡла, - тип кенә әйтә алды. Байрас йәһәт кенә өйгә инеп китте. Күп тә тормай, һалдатты һорап йәштәр килеп етте. Уларҙы: "Йонсоп ҡайтҡан, ял итһен", - тип кире ебәрергә тура килде.

- Атаһын... ҡыуанып ҡына йөрөгән атаһын... - Миңлехан, телгә килеп, һыңҡылдап илап ебәрҙе. Әсә кеше өндәшмәй генә эскәмйәгә ултырҙы ла, иренең һуңғы йылдарҙа салланып өлгөргән шырт сәсле башын күкрәгенә ҡыҫты. Был донъяла япа-яңғыҙ ҡалғандай көйәләнгән ата һәм әсә Саҡ менән Суҡ зарланыуын тыңлап, тынып ҡалды.

* * *

Вәсилә, төндә йоҡламаған көйө, таң һарыһынан тороп ҡоймаҡ ҡойҙо, мейескә муйыл бәлеше тығып ебәрҙе. Көн аяҙ булһа ла, Миңлехан да бесәнгә китергә ашыҡманы. Бүтән мәл "ямғырҙар башланмаҫ борон эште бөтөрәйек" тип үрһәләнер ине әле. Уның өсөн байрам - улы ҡайтҡан! Әрменән! Тик бына ауылдаштары, туғандары алдында ҡупайып күрһәтергә хәрби кейеме генә юҡ. Булмауы хәйерле. Байрас әйтеп һалды бит. Һалдат кейемендәге егеттәрҙе поезда үлтергәндәрен. Ул ҡәһәрле территорияны үткәнсе ҡоттары ус төбөндә булғандыр инде егеттәрҙең...

Самауыр, шыжлап, өҫтәлгә ҡунғас, Вәсилә иренә Байрасты уятырға ҡушты. Миңлехан аяҡ осона ғына баҫып, бүлмәнең ишеген асып, тамаҡ ҡырҙы ла, кире әйләнеп килде:

- Юҡ ул...

Вәсиләнең йөрәге тағы табанына төштө. Ишек алдында ла күренмәне ләбаһаң! Шым ғына сәй һөрпөлдәткән мәлдә Байрас килеп инде. Һикереп торған ата-әсәһенә иғтибар бирмәй, бүлмәһенә үтте. Артынан ауыр тәмәке еҫе борхоп ҡалды. Ашыҡ-бошоҡ йыуынды ла, ашарға ултырҙы. Һүҙҙе нимәнән башларға ла белмәгән ир менән ҡатын, бер-береһенә ҡарарға ла ҡурҡып, тынып ҡалды. Вәсилә йылы ҡоймаҡты бала алдына шылдырҙы. Миңлехан бал менән ҡаймаҡты яҡынайтты. Байрас балды бер ҡалаҡ ҡына ҡапты. Ҡаймаҡҡа бөтөнләй ҡағылманы. Берике ҡоймаҡты ашағас, сәйен дә эсеп бөтмәй, ҡапыл тороп, бәҙрәфкә йүгерҙе.

- Эй, балаҡай... - атаның алҡымына төйөр, әсәнең күҙенә йәш тығылды.

Байрас, тыштан ингәс, сәйгә кире ултырманы. Бүлмәһендәге карауатҡа ауҙы. Төпкә батҡан күҙҙәрен түшәмгә текәне. Өйҙә ауыр тынлыҡ урынлашты. Әйтерһең дә, һалдат армиянан ҡайтмаған, әйтерһең дә, ата менән әсә һаман да билдәһеҙлек алдында яфалана.

* * *

Билдәһеҙлектән дә ауыр яза юҡтыр кешегә. Вәсилә шундай ҡаты һынау үҙенә лә эләгер, тип һис уйламағайны. Юғары уҡыу йортона инерҙәй һәләте булған башлы Байрасты, өйҙө һалып бөтәйек әле, тип эргәләге Аксен ауыл хужалығы техникумына ебәрҙеләр. Ебәрҙеләр түгел, Вәсиләнең идеяһы булды был. Ҡайтып йөрөр, хужалыҡта ярҙам итер, тип уйланы. Ололарға ҡаршы бер һүҙ әйтеп өйрәнмәгән тыңлаусан, күндәм бала зоотехник һөнәрен үҙләштергәс: "Гел уҡыу ҙа уҡыу булмай, аҡса эшләп алайым", - тип эшкә төшөргә йыйынды. Тик шул көҙҙә үк армияға алынды, Өфөлә хеҙмәт итә башланы.

Бер мәл һалдаттан: "Мине Тольяттиға учебкаға ебәрәләр, ярты йылдан Өфөгә кире ҡайтам", - тигән хат килде. Миңлехан: "Ай-һай..." - тип әйткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды. "Нимә, ай-һай! Нимә, ай-һай! Ҡайтыр!" - тип ҡыҙып алып китте үҙе лә шомлана башлаған ҡатын.

Ул арала ауылды ҡара ҡайғы баҫты. Түбән оста йәшәгән почта ташыусы Зөмәрә апайҙың берҙән-бер улы Чечнянан цинк табутта ҡайтты. Уны ике хәрби оҙата килгәйне. Зөмәрә апай балаһының үлеүенә ышанманы. Табутты асып күрһәтеүҙе талап итте. Шул ауыр һөйләшеүҙең шаһиты булған Вәсилә менән Миңлехан: "Ерләргә килербеҙ", - тип ҡайта һалып киттеләр. Ҡәбер өҫтөнә һынһыҙ йығылған әсәне күргәс, улар был хәлдең аяуһыҙ ысынбарлыҡ икәненә инанды. Әсә: "Күрһәтмәһәгеҙ, ерләгәндән һуң, һеҙ киткәс ҡаҙып алып ҡарайым! Минең улым тере!" - тигәс, табутты асып, башын ғына күрһәткәндәр, тигән хәбәр таралды. Һалдатты ҡәҙерләп, автомат залптары менән, веноктар, сәскәләр менән күмеүҙәме һуң эш! Вәсилә Зөмәрә апайҙы йыуатып бер нәмә лә әйтә алманы. Ни әйтһәң дә, артыҡ, файҙаһыҙ һымаҡ тойолдо. Ҡайғынан һарғайып, ауырыуға һабышҡан почта ташыусыны бер туған апайы Равкаға күсереп алып китте. Зөмәрә апай менән хушлашырға килгән кешеләр уны һуңғы юлға оҙата һымаҡ күренде. "Ул ниндәй мәғәнәһеҙ уй ул - һуңғы юлға оҙата, тигән?" - Вәсилә күңелһеҙ уйҙарынан үҙе оялып китте. "Апайы балнисҡа һалып, эшкиндереп алыр әле. Һауыҡҡас, йән яраһы төҙәлгәс, ауылға һелкетә баҫып ҡайтып төшөр! Ээәй, нимә юҡты һөйләйһең? Йән яраһы төҙәләме ни ул? Ана бит. Тағы тиҫкәре уйҙар башты ҡаңғырта!"

Ярты йыл тиҙ генә үтә һалып та китте. Байрастан: "Мин Өфөлә", - тигән ҡыуаныслы хәбәр алғас, Вәсиләнең башы күккә тейҙе. Әммә күп тә үтмәй: "Беҙҙе Ҡазанға ебәрәләр", - тигән хат килде - шуның менән улар араһындағы бәйләнеш өҙөлдө. Көн артынан көн, ай артынан ай үтте. "Тереме ул бала, үлеме? Чечняға ғына алып китә күрмәһендәр!" Әсәнең кереш һымаҡ тартылған нервыһы бына-бына өҙөлөп китер һымаҡ ине. Ярай әле эргәһендә Миңлеханы бар. Ара-тирә көсөндө төшөрөп алырға. Әлдә уныһы сабыр, ҡатынының ни өсөн юҡҡа-барға ла ҡабынып барыуын аңлай. Вәсилә ҡыҙа башлаһа, ҡаршы ирәгәләшмәй, йә мал араһына сығып тая, йә гәзит тота һалып ултыра.

Тиҙҙән Байрастан өҙөлөп көтөлгән хат килде. Тышта уҡ конвертты йыртып асҡан Вәсиләне ул ҡыуандырманы.

- Байрасҡа бер-бер хәл булғанмы әллә? - тине Миңлехан ҡобараһы осҡан ҡатынын күреп. Хатты уҡығас, йылмайып ебәрҙе: "Бына ла баһаң. Хеҙмәт итә. Чечняла булһа һуң. Ир кеше бит ул. Бирешмәҫ. Байрас ул беҙҙең - ух! Урус-Мартанда хеҙмәт итә. Барыһы ла һәйбәт. Иҫән-һаумын, тигән..." Был һүҙҙәрҙе әллә Вәсиләһен, әллә үҙен йыуатыр өсөн генә әйтте ул.

Шул көндән бирле улар телевизорҙан яңылыҡтарҙы һағалап ҡына торҙо. Күршеләре, таныш-белештәре лә Чечня тураһында яҡшыраҡ һүҙ ишетһә, йә йүгереп инә, йә шылтырата һала. Бер мәл Урус-Мартанда көсөргәнешлек тураһында хәбәр иттеләр. Эфирҙа - хараба. Шул тиклем емереклектәр араһында иҫән ҡалыусы бар микән һуң ул? Вәсиләнең йөрәге ҡыҫылды. Йөҙө күгәрҙе. Ҡыҫҡа-ҡыҫҡа, һиҙелер-һиҙелмәҫ тын алып, арҡаһы менән диванға терәлде. Тыштан килеп ингән Миңлехан уны шул рәүештә күрҙе. Нимә эшләргә лә белмәне. Йүгереп йөрөп валидолын, корвалолын бергә ҡойоп килтерҙе. Көслəп ҡайнар сәй эсерҙе, һыуына башлаған ҡул-аяғын ыуҙы.

- Әллә эсеп ҡарайыммы? - тине Вәсилә, шыбырҙап.

- Нимә тиһең?

- Эсеп...

- Ай Алла... тағы нимә бирәйем һуң? Юҡ бит. Скорый саҡырайыммы әллә?

- Бар... шифанирҙа.

- Ә...

- Пәлтә артында.

- Ҡуй! - Миңлехандың күҙҙәре түптүңәрәк булды, - Алкаш булып китһең!

- Ҡыйын бит! - Вәсиләнең күҙҙәренә ауыр күҙ йәштәре төйөлдө.

- Араҡының ни уның. Эсеү менән генә рәхәт. Айныҫ ҡыйын. Тағы ла ҡыйыныраҡ була.

Миңлехандың был ысулды үҙендә самалап ҡарағаны бар. Ул белә. Хәлен еңеләйтәм, тип һыйлап ҡайтарғандары бар иптәштәренең. Киреһенсә, үҙенә бикләнә ул.

Вәсилә бер аҙ ятып алғас, үҙен ҡулға алды. "Ҡарама шул яңылыҡтарҙы, йөрәгеңде бөтөрөп!" - тип дөрөҫ әйтә ире. Тик сәғәте-минуты етһә, сихырланған һымаҡ шул тере йәшник алдына бара ла ултыра шул. Ни хәл итәһең!

* * *

Вәсилә шул ваҡыттарҙы иҫкә төшөрөп: "Аллаға шөкөр, балабыҙ эргәлә", - тип уйлап, түрбашта өрөлөпсөрөлдө.

Асыҡ ишектән бәпәйҙәр ләпелдәшкән тауыш ишетелде. Вәсиләнең йөҙө яҡтырып китте:

- Улым, апайыңдар килгән, сыҡ! - тине ул, ҡыуанып.

Тәтелдәшкән игеҙәк балалар өй буйлап йүгерергә тотондо. Шәүлә һымаҡ шыуып, шым ғына изән уртаһына сығып баҫҡан Байрас апайына ҡул биреп күреште лә, бүлмәһенә кире сумды. Вәсилә һалдат күрергә килгән туғанына ни әйтергә лә белмәне. Өҫтөнә менеп сәрелдәшеп аунаған сабыйҙарҙы һаҡ ҡына ҡағып төшөргәс, Байрас урамға сыҡты. Ҡустыһының был ҡыланышына ҡылтайған апай кеше сәй ҙә эсмәй, балаларын өйөрөлтөп алып, ҡайтып китте. Геү килеп торған өй тағы шомло тынлыҡҡа сумды.

- Һуң, балаҡайым, бәләкәстәрҙең күңелен күрһәң ни була? Һин юҡта тыуған сабыйҙар бит улар... - ҡайҙан әйттем, тигән көнгә тыуҙы әсә улының үҙенә әйләнеп ҡараған быяла күҙҙәрен күргәс.

Кисен Миңлехан өҫтәлгә араҡы ултыртты.

- Эс, улым, бәлки, яҙылырһың... артығы - харам.

Байрас араҡыға ытырғанып ҡарап алды ла, рүмкәне ҡулы менән ситкә ышырҙы. Миңлехан:

- Маладис, - тип әйтеүҙән башҡа һүҙ тапманы. Тәрилкәһенән алып, бер-ике тос билмәнде ләззәт менән сәйнәп йоткас:

- Шунан, улым. Һуғышырға тура килде инде һиңә... һуғыш булғас, ыһым... - тигәйне лә, Вәсилә өҫтәл аҫтынан уның аяғына баҫты.

- Туҡтале! Нисек унда... теге ней... кеше үлтерергә лә тура килгәндер. Ә нимә! Һалдаттың эше шул! Йә дошман - һине, йә һин - дошманды, - Миңлехан муйынын салып күрһәткәс, Вәсилә түҙмәне, уға ҡалағын елгәрҙе. Байрас, йышйыш тын алып, йоҙроғон төйнәп бер аҙ ултырҙы ла, ҡапыл сығып китте. Уның йөҙө ҡурҡыныс булып үҙгәргәйне.

Ауыр тынлыҡ өйҙә көн буйына дауам итте. Миңлехандың сабыны иҫкә төштө. Сапҡан бесәне шыптырҙап кипкәндер. Күпме була баланың күңелен күреп өйҙә ятырға? Машина башындағы багажникҡа тырмалар, һәнәктәр бәйләп һалды. Иртән ҡаңғырып йөрөмәҫкә, тип сүлмәген, сәйнүген хәстәрләне. Иртәгә уны ниндәйҙер изге яңылыҡ, ҡыуаныс көтәлер һымаҡ ине. Эргәһендә ҡатыны әйләнеп-тулғанып ятһа ла, тиҙ генә йоҡлап китте.

- Улым, улым! Әйҙә бесәнгә барайыҡ! Сабынлыҡты күрерһең. Ауыр эш юҡ унда. Тырматып булмаһа, сәй ҡайнатып ултырһаң да еткән.

**(Дауамы бар).**

✓ *Ҡәнзәфәр бейҙең дүрт улы булыуы тураһында бер нисә шәжәрә бар. "Прежде всего у Казанфари-бия есть четыре сына. Первый - Кужабахты, 2-й - Худайбахты, 3-й - Кудаш, 4-й - Дистан...".*



*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# ҠӘНЗӘФӘР БЕЙ, ҺИҢӘ НИСӘ ЙӘШ?

**2010 йылда үткәрелгән халыҡ иҫәбен алыу материалдарына ҡарағанда, хәҙерге көндә мең ырыуы вәкилдәре йәшәгән райондарҙа яҡынса 275 мең тирәһе меңле башҡорттары иҫәпләнә.**

Һуңғы йылдарҙа мең ырыуы башҡорттары араһында үҙ тарихын өйрәнеүгә ҡыҙыҡһыныу артты. Ырыуҙаштарҙы иң ҡыҙыҡһындырғаны - ырыуҙың етәксеһе Ҡәнзәфәр бей. Сөнки уның тураһында, бигерәк тә тыуған төйәге һәм йәше тураһындағы мәғлүмәттәр бик аҙ. Уның йәшәү осоро күрһәткән башҡорт шәжәрәләренә күҙ һалайыҡ. Ҡәнзәфәр бейҙең ейәне Ҡудашев Янбахты төҙөгән шәжәрәнән: "...Его (Муса-бей) сын Казанфари. Он виделся с Каракильмет-бием. Каракильмет виделся с Гарей-бием. Гарей-бий был старше Каракильмета, а Казанфари-бий был моложе"(Башкирские родословные. Уфа. Китап. 2002. Выпуск 1). Документтарҙан күренеүенсә, Гәрәй бей 1546-1558 йылдарҙа Башҡортостанда Ноғай урҙаһының идара башлығы етәксеһе булған. Ҡаракилмәмәт (Ҡара Кил Мөхәмәт) XVII быуат башында Башҡортостанда шулай уҡ Ноғай урҙаһының урындағы идара башлығы булған һәм 1631 йылда үлгән.

XVI быуат баштарында ҡалмыҡтар башҡорт ерҙәренә баҫып инә һәм шул уҡ ваҡытта Рус батшаһы Ҡазан ханлығына походтар башлай. Ноғай мырҙалары, ҡурҡып, Кубанға күсенә һәм мең башҡорттарын үҙҙәре менән китергә өндәй. Бына шул ваҡытта Ҡәнзәфәр бей тоҡомдаштарын үҙ иленә ҡалырға саҡырып, күтәрелеп сыға. Ырыуҙаштары уны тыңлап, үҙ ерендә тороп ҡала. 961 йылда (1554-1555 һижри йылы - **Авт.**) мең ырыуы башҡорттары Ҡәнзәфәр бей етәкселегендә Рус батшаһының Ҡазандағы идара башлығына барып һөйләшеүҙәр үткәрә, шуның һөҙөмтәһендә улар үҙ теләктәре менән Рус дәүләтенә инәләр һәм жалованная грамота алалар (Научное издательство "Башкирская энциклопедия", 1996.)

Ҡәнзәфәр бейҙең дүрт улы булыуы тураһында бер нисә шәжәрә бар. Уларҙың береһе Ҡәнзәфәр бейҙең улдарының 1567 йылда Мәскәүгә барыуы тураһында. "Прежде всего у Казанфари-бия есть четыре сына. Первый - Кужабахты, 2-й - Худайбахты, 3-й - Кудаш, 4-й - Дистан...".

Шулай итеп, юғарыла килтерелгән дәлилдәргә ҡарағанда, Ҡәнзәфәр бей яҡынса XVI быуаттың икенсе яртыһында һәм XVII быуаттың башында йәшәгән, тип һығымта яһарға мөмкин.

Ә бына ғилми баҫмаларҙа һәм шәжәрәләрҙә Ҡәнзәфәр бейҙең тыуған йылын һәм төбәген иҫбатлаусы бер генә дәлил дә табылмағайны. Ләкин көтмәгәндә 2019 йылдың февраль айында ҡырыкөйлө-мең ырыуы етәксеһе, Мең ырыуҙары советы ағзаһы Хәлиуллин Филүс Исмәғил улы миңә Шишмә районы Ябалаҡлы ауылына килеп, Ҡәнзәфәр бей тураһындағы материалдар менән танышырға тәҡдим итте. Был көтөлмәгән хәбәр мине ғәжәпләндерҙе һәм шатландырҙы ла. Март айында мин Ябалаҡлы ауылына юл тоттом. Ябалаҡлы ауылы имам хатибы Вәликәев Салауат Ҡорбанғәле улы һәм ауылдың хөрмәтле кешеләре Ҡәнзәфәр бей, шулай уҡ ауылдың шәжәрәләре тураһында күп кенә мәғлүмәт бирҙе. Мәҫәлән, Дәүләкән районы Иҫке Шәрип ауылында тыуған Ғәлина Ғәйшә Муллабай ҡыҙы 1970 йылда Дәүләкән районы Ҡаҙанғол ауылында тыуып үҫкән, әлеге көндә Ағиҙел ҡалаһында йәшәгән тарихсы-уҡытыусы Мөхәмәҙғәлин Рәүеф Ғәфүр улына тышлығына "Ҡотлояр мулла бәйеттәре" тип яҙылған егерменән артыҡ ҡалын дәфтәр тапшыра. "Минең башҡа ышаныслы кешем юҡ, һиңә ошо боронғо яҙыуҙы тапшырам, бында беҙҙең Ҡәнзәфәр бейҙән башлап боронғо ата-бабаларыбыҙҙың тарихы яҙылған. Өфөгә барһаң, ошо ҡулъяҙмаларҙы берәй уҡымышлы кешегә тапшыр", - ти ул. Рәүеф, тәрбиәле кеше булараҡ, Ғәйшә Муллабай ҡыҙының үтенесен һис кисекмәҫтән үтәй. Өфөгә барып, ул ваҡытта "Ленинец" гәзитенең бүлек етәксеһе булып эшләгән Юрий Узиковҡа материалдарҙы тапшыра. Юрий Александрович материалдарҙы ҡабул итеп ала һәм тәржемә итеп, матбуғатта баҫтырып сығарырға вәғәҙә бирә. Ләкин был материалдар матбуғатта баҫылмай һәм төп нөсхә шулай итеп юғала. Рәүеф Ғафур улында уның күсермәләре генә ҡала һәм уларҙы миңә күрергә насип булды.

Хәҙер Ҡотлояр мулланың Ҡәнзәфәр бейгә арналған шәжәрәләренә һәм ҡайһы бер бәйеттәренә туҡталайыҡ: "Хөрмәтле бөйөк, һәм аҡыл эйәһе, һәм уҡымышлы Ҡәнзәфәр бей тыуҙы Ябалаҡ ауылында 939 милләди йылында. Аллаға дан булһын, уға тиңдәш башҡа юҡ. Мусабей улы Ҡәнзәфәр бейҙе 1012 йылдың рамазан айының 10 августында мәңгелек йортҡа ҡуйҙы. Урынын Мәһүала ожмахында ит. Яҙҙы Әсфәндийәр мулла, был ҡыяғаҙға күсерҙе Ҡотлояр мулла 1912 йылда". Шәжәрәне Әсфәндийәр мулла үҙе күсереп яҙғанмылыр, уныһы билдәһеҙ. Ҡотлобулатов Әсфәндийәр мулла 1856 йылда Дәүләкән районы Иҫке Шәрип ауылында тыуған. Ҡаҙанда "Ҡасимиә" һәм Өфөлә "Ғосмания" мәҙрәсәләрен тамамлаған күренекле шәхес, указлы мулла. Уның улы Ҡотлояр 1892 йылда шул уҡ ауылда тыуған һәм Өфө, Дәүләкән мәҙрәсәләрен тамамлаған белемле сәсән, йырсы, мөғәллим, Иҫке Шәрип ауылында имам-хатиб булып торған.

Ҡарғалы ауылының имам-хатибы Салауат Вәликәев һәм ҡырыкөйлө-мең ырыуы етәксеһе Филүс Хәлиуллин, шулай уҡ ҡарттарҙың әйтеп ҡалдырыуынса, Ҡәнзәфәр бей Ябалаҡлы ауылы эргәһендәге зыяратта ерләнгән. Икенсе версияға ҡарағанда, шул уҡ урында Ҡәнзәфәр бейҙең төпсөк улы Ябалаҡлы ауылы старостаһы Хәжәр ерләнгән. Быларҙы асыҡлайһы бар әле. Ҡотлояр мулланың бәйетенә ҡарағанда, Ҡәнзәфәр бейҙең өс ҡатыны һәм биш улы булған. Иң кесе улы Хәжәр нисәнсе ҡатынынан булғандыр, хәҙергә уныһы билдәһеҙ. Әйтелгәндәрҙе раҫлау өсөн Ҡотлояр мулланың бәйетенән бер нисә өҙөк килтерәйек.

*Ваҡытында бик әүәл,*
*Мең дәүләте булғандыр,*
*Тулы һыулы Күк иҙел,*
*Сылтырап аҡҡан Өршәге.*
*Зәңгәр һыулы күлдәре,*
*Асылы, Ҡандра һыуҙары,*
*Был ырыуға кергәндер.*
*Ҡалын ҡара урмандары,*
*Киртләс киткә тауҙары,*
*Иркен ялан-ҡырҙары*
*Булған ырыу байлығы.*
*Әүәл-әүәл электән*
*Ошо ерҙе төйәк иткән,*
*Беҙҙең башҡорт бабалар.*
*Булған уның аҡыллы*
*Батырҙары, бейҙәре.*
*Тирә-яҡта дан тотҡан,*
*Ҡәнзәфәр бей булғандыр.*

* * *

*Донъя көткән шул ерҙә,*
*Һис нужа күрмәгән.*
*Береһенән-береһе матур,*
*Өсәү булған ҡатыны.*
*Иң өлкәне матуры,*
*Бүләк иткәндер уға*
*Биш уланды, батырҙы.*
*Биш бармаҡтай беҙәм булып,*
*Батыр булып үҫкәндәр.*
*Буй-һындары етеү менән,*
*Уҡ-һаҙағын алғандыр.*
*Атаһының һүҙен йыҡмай,*
*Тоғро булып үҫкәндәр.*
*Аҡ батшаға ҡушылғас,*
*Дүрт уланын йыйғандыр.*
*Васыятын әйтә һалып,*
*Ерҙәр бүлеп биргәндер.*

* * *

*Иң кесеһе Хәжәре,*
*Ҡалған бейҙең янында.*

Был бәйет Ҡәнзәфәр бейҙең тыуған йылын һәм ауылын асыҡлай. Бәлки, ырыуыбыҙҙың етәксеһе тураһындағы материалдар тағы ла кемдәрҙәлер һаҡланалыр? Беҙгә хәбәр итеүегеҙҙе һорайым. Ҡотлояр мулланың шәжәрәһенә ҡарағанда, 2022 йылда ырыу етәксебеҙ Ҡәнзәфәр бейҙең тыуыуына 490 йыл тула. Был датаны тейешенсә ҡаршы алып үткәреү һәм уның исемен мәңгеләштереү ырыуҙаштарыбыҙҙың бурыстарының береһе.

**Әхнәф ТИМЕРБУЛАТОВ,**
**"Мең ырыуы" төбәк-ара йәмғәт берләшмәһе советы рәйесе.**

*ӘЙҘӘ...*

**Ни өсөн башҡорт ҡыҙҙары ҡырыҫ? Был яҡшымы, насармы? "Киске Өфө"нөң бер һанында баҫылған мәҡәләлә ошо турала фекер алышынғайны. Һүҙҙе дауам итмәксемен.**

# ТЫРТ-МЫРТ ИТМӘ!

Әйтәйек, ҡала транспортында, урамда, йә паркта таныш булмаған ҡыҙ кешегә, йә ҡатын-ҡыҙға ипле генә итеп һүҙ ҡушаһың, ти. Бөтә осраҡта ла тиерлек "тырт-мырт"ҡа тартым яуап ишетәһең. Йыш ҡына көсһөҙ зат тупаҫ тәкәбберлек менән ир-егетте шундуҡ "йыға һуға". Былай итеп, әҙәм балаһын рәнйетергә ярамай, хөрмәтле ханым-туташтар. Һәр хәлдә, ипле итеп яуап бирергә кәрәк. Тупаҫлыҡ менән ҡырыҫлыҡ, милләтенә ҡарамайынса, совет илендәге күпселек ҡатын-ҡыҙҙарға хас булды. Был хәлдең сәбәптәрен мин дөйөм мәҙәниәттең һәм коммунистик тәрбиәнең үҙенсәлеге, дөрөҫөрәге, бер яҡлылығы, рухи азатлыҡтың сикләнгәнлеге менән аңлатыр инем. Ә башҡорт ҡыҙҙары башҡаларға ҡарағанда ла ҡырағайыраҡ тойола ине. Бәлки, был сифат беҙҙең халыҡтың эске азатлыҡ тойғоһо көслө булыуынан да киләлер.

70-се йылдарҙа, институт бөткәс, Пермь ҡалаһында нефть заводын сафҡа баҫтырып йөрөйөм. Үҙебеҙҙең ҡыҙҙар юҡ, башҡаларға яҡынайыу хаҡында уйлап та бирмәйһең - шундай тәрбиә бирелгән. Шулай ҡаңғырып йөрөгәндә урамда матур бер башҡорт ҡыҙы осраны. Бында практика үтә икән. Бик ыңғай һөйләштек, яҡташтар бит инде, Өфөлә уҡығанбыҙ. Киноға саҡырам. Күреп торам, теләге бар, әммә икеләнә милләттәш ҡыҙыҡай. Риза булманы. Хәтерем ҡалды. Һуңынан әсәйемә зарланам. "Ҡурҡҡандыр ул", - ти. Үәт, әкәмәт! Минең турала "Ҡыҙҙар һымаҡ ҡына бит ул", тип йөрөгән әсәйем шулай тиһен әле! Ысынында иһә, ул саҡта мин үҙем ояла инем ҡыҙҙарҙан.

Тормош шулай ҡоролғандыр, әҙәм балаһы үткәндәре өсөн үкенергә яратыусан. Ҡатын-ҡыҙ өсөн шул үкенестәрҙең ярайһы уҡ өлөшө ошондай өндәрҙән ғибәрәт: "Фәлән ваҡытта ниңә генә теге әфәнде менән йүнләп һөйләшмәнем икән? Әгәр шунда танышҡан булһаҡ..." Гүзәл затҡа "Тимерҙе ҡыҙыуында һуҡ", тип әйтмәйем мин. Бында баҫалҡылыҡ һәм ҡырыҫлыҡ, мосолман дине ҡанундары һәм ғәҙәти тормош принциптары араһында ышаныслы баҫҡыс табырға кәрәктер.

Көнкүрешебеҙгә күптән инде "һәүетемсә аралашыусанлыҡ" (коммуникабельность) тигән нәмә үтеп инде. Хәҙерге шарттарҙа ҡырыҫлыҡ артҡа сигенергә мәжбүр. Тик ҡапма-ҡаршы яҡтың осона сығып китмәйек. Хәҙер ҡыҙҙар үҙҙәре үк танышлыҡ эҙләргә мәжбүр икән, тигән хәбәрҙәр ишетелеп ҡала. Быға аптырап булмай, сөнки егеттәргә ҡарайһың да, уларҙың ҡыҙҙарға ҡарата ғәмһеҙлегенә хайран ҡалаһың. Был тәбиғәт закондарына тап килмәй ҙә баһа! Беҙҙең быуын ул яҡтан камил булды. Бәлки, мин хәҙерге егеттәргә ҡарата ғәҙел түгелмендер? Улайһа, һүҙемде күңеллерәк тамамлайым.

...Кискә табан ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарап һоҡлана-һоҡлана китеп барам. Ҡаршыға матур кейенгән һылыу килә. Уны фырт ҡына егет ҡыуып етә:

- Ғәфү итегеҙ, һеҙҙең менән танышырға мөмкинме?

- Юҡ, мин ашығам. Икенсенән, танышырға теләмәйем, ғәфү итегеҙ. Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт.

Башҡортса һөйләшәләр...

**Дауыт АМАНГИЛДИН.**

✓ *Был үләндәр Башҡортостаныбыҙҙың һәр төбәгендә үҫә һәм был ҡушылмаларҙы хәтерҙә тиҙерәк ҡалһын өсөн "Бишут"сәйе тип атаным. Йәғни был ҡушылмаға биш төрлө үлән ҡушыла.*



ИНТЕРНЕТТАН

# ТЕЛЕФОН...

## диагноз ҡуя

■ Альберта университеты ғалимдары депрессияны пациенттың тауышына ҡарап билдәләргә өйрәнгән. Уларға яһалма интеллект ярҙамға килгән. Билдәле булыуынса, тауыш тембрында кешенең кәйефе тураһында мәғлүмәт һалынған була. Мобиль ҡушымта хужаһы телефондан һөйләшкәндә тауыш өлгөләрен йыйып бара һәм уның кәйефе, шулай уҡ депрессия барлығы йә юҡлығы тураһында маркерҙар билдәләй. Был технология әлегә камиллаштырыла һәм киләсәктә ул медицина персоналдарына дауа үткәреү өсөн ярҙам итеүе мөмкин. Эксперттар әйтеүенсә, депрессия һөҙөмтәһендә кеше эшкә һәләтлелеген дә юғалтыуы бар. Шулай уҡ суицид осраҡтарының күбеһе депрессия кисереү һөҙөмтәһендә башҡарыла.

■ Банан, ноҡот борсағы һәм ер сәтләүегенә хас бай диета балаларҙың эҫәк миклофлораһын яҡшырта. Дөйөм алғанда, бындай диета уларҙың һөйәктәре, баш мейеһе үҫешенә ыңғай йоғонто яһай. Был продукттарҙы пребиотик тип әйтергә лә була, тип белдерә Вашингтон университеты белгестәре. 12-18 айлыҡ балаларҙы күҙәткәндән һуң улар ошондай һығымтаға килгән. Банан, соя, ер сәтләүеге оно һәм ноҡот борсағы пастаһынан торған рацион иң ҡулайлыһы тип табылған. Ә бына дөгө, ҡуҙаҡлылар, киреһенсә, эҫәк микрофлораһына зыян итә.

■ Төндә насар йоҡлаһаң, йоҡларға ятыр алдынан физик күнекмәләр эшләп ал, тип кәңәш итә ғалимдар. АҠШ-тың Йоҡо милли фонды үткәргән һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусылар яуаптары буйынса бер нисә төркөмгә бүленгән: уларҙың ҡайһылары күнекмәләрҙе даими яһаған, ҡайһылары еңелсә генә спорт менән шөғөлләнгән, ҡайһылары бөтөнләй ҡыбырларға яратмаған. Кем ниндәй ҙә булһа күнегеү төрө яһаған, улар яҡшыраҡ йоҡлаған. Кемдәрҙер матур төштәр күреүен дә билдәләгән. Көнөнә 10 минут ҡына йәйәү йөрөү ҙә йоҡоноң сифатын күпкә яҡшырта, ти белгестәр.

■ Кафе һәм ресторандарҙың йәйге верандаларында туҡланыу сәләмәтлеккә зыян килтерә, тип иҫкәртә Роспотребнадзор. Ризыҡҡа ҡунған ҡала саңы гигиена талаптарына бер нисек тә тура килмәй. Асыҡ һауалағы ауыр металл тоҙҙары, бигерәк тә ҡурғаш менән кадмий зарарлы. Мәҫәлән, ҡурғаш ҡыҙыл ҡан тәнсәләре барлыҡҡа килеү процесына тәьҫир итеп, эҫәк, ҡан тамырҙарына зыян итә. Ҡурғаш менән ағыуланыуҙан баш мейеһе эшмәкәрлеге лә үҙгәрә, хатта когнитив һәләттәр, хәтер юғалыуы, галлюцинациялар барлыҡҡа килеүе ихтимал. Ҡурғаш машиналар бүлеп сығарған газда була. Кадмий организмға ризыҡ һәм тәмәке тәтенә аша әләгә һәм үпкәләргә ултыра. Ул канцерогендар менән дә хәүефле. Ауыр металдарҙан тыш, автоюлға яҡын һауала ҡором, күмер өлөшсәләре, шина туҙаны һәм асфальт ҡатламы туҙыуы һөҙөмтәһендә бүленгән матдәләр бар. Аллергия менән ауырыусыларға ла йәйге верандаларҙа ашау кәңәш ителмәй, үҫемлектәрҙең һеркәһе, микроорганизмдар күҙәнәктәре эләгеүе мөмкин.

ЙӘШЕЛ ДАРЫУХАНА

# "БИШУТ" СӘЙЕ

**Ер йөҙөндә "сәй" тип аталған япраҡты эҫе һыуҙа бешереп эсеү ғәҙәте нисек, ҡайҙа барлыҡҡа килгәндер, аныҡ түгел. Әммә төрлө үләндәрҙе бешереп эсеү, моғайын, таш быуаттан килә. Кешенең мейеһе һәр ваҡыт ижади эшләп тора. Шуның менән дә ул хайуандыҡынан айырыла. Ниндәй үләнде бешереп эсһәң, ниндәй сирҙәр кәмей, ниндәй көс-ҡеүәт арта йәки, киреһенсә, ниндәй үлән быуындарҙы йомшарта, йоҡоно килтерә икәнен ата-бабаларыбыҙ быуындан-быуынға һөйләп, өйрәтеп, күсереп килгән.**

Иң ҡыҙығы, һәр халыҡта үҙенсәлекле ысулдар йәшәй. Мәҫәлән, ҡытайҙар күберәк йәшел, ҡыҙыл, һары һәм хуш еҫле сәйҙәрҙе ярата, Тибетта иһә "часуйма" тигән сәй эсәләр (был сәй преслanған япраҡтарҙан бешерелә лә мотлаҡ иретелгән һыйыр майы һәм тоҙ өҫтәлә). Әйткәндәй, Тибетта борон-боронданбашҡорттарҙағы кеүек талҡан ҡулланалар һәм талҡан онона май ғына түгел, брикетҡа ҡатырылған сәй япраҡтары онтағын да ҡушалар. Үҙенсәлекле "ҡоро сәй" килеп сыға. Уны ашаған кешенең кәйефе күтәрелә һәм сәләмәтлеге яҡшыра. Монголдар иһә беҙ эсеп өйрәнгән ҡәҙимге сәйҙәргә һөт кенә түгел, май, тоҙ ҙа ҡушалар. Ҡайһы берҙә бер стакан сәйгә тоҙ ғына түгел, бер бөртөк ҡара борос та төшөрәләр. Ҡалмыҡтар был тәңгәлдә лавр япрағы йәки мөшкәт сәтләүеген (мускатный орех) ҡулланалар. Япония ла йәшел сәй яраталар. Улар бигерәк тә сәйҙең хуш еҫенә ныҡ иғтибарлы. Шуға ла бер стакан һыуға бер балғалаҡ самаһы йәшел сәйҙе налып, сәйнүккә эҫе һыу ҡоялар ҙа бирике минуттан эсә башлайҙар. Сәй тулыһынса бешеп өлгөрмәй. Эҫе килеш аш алдынан яйлап ҡына ике-өс йотом (шәкәрһеҙ генә), ашап бөткәс тағы ла шулай эҫе сәйҙе ике-өс йотом эсеп ҡуялар.

Бөгөнгө көндә "сәй" һүҙе бары тик "сәй япрағын" ғына бешереп эсеүҙе түгел, ғөмүмән, үләнде эҫе һыуҙа бешереп эсеүҙе аңлата. Буталыш китмәһен өсөн генә "үлән сәйе" тибеҙ. Хәҙер төрлө дарыуханаларҙа йәнеңә теләгән ҡушылмалы "үлән сәйҙәре"н табырға мөмкин (бигерәк тә артыҡ һимереүҙе туҡтата торғандары күп осрай).

Минең фекерем шулай: һатыуҙағы, бигерәк тә лицензиялы аптекаларҙағы һәр үлән дә ентекле тикшереү үтә һәм, әлбиттә, ниндәйҙер кимәлдә файҙалы. Ни өсөн "ниндәйҙер кимәлдә" тием, сөнки ысынлап та файҙаһы тейһен өсөн был ҡушылмаларҙы бик оҙаҡ, хатта бирике йыл дауамында бер туҡтауһыҙ, әммә самаһын белеп (күрһәтмәлә яҙылғанса) кенә эсергә кәрәк. Шунда улар ысынлап та файҙалы. Ә беҙ нимә эшләйбеҙ? Грипп йәки башҡа берәй инфекция сире башландымы, тиҙ генә һауығыу өсөн йә ҙур миҡдарҙа үлән бешереп эсеп, "зыян" эшләп ҡуябыҙ, йәки үләндәрҙе, мәҫәлән, тын юлдарын таҙартыу өсөн (бронхит, трахеит, пневмонияларҙан һуң) йүткереү туҡтағанса, бер-ике аҙна дауамында эсәбеҙ ҙә, вәссәләм. Минеңсә, был дауаланыу бик файҙалы булмаясаҡ. Бары тик ошо үләндәрҙе һатып алған аҡсаны елгә осороу ғына.

Шулай аҡсағыҙҙы ла янда ҡалдырып, сәләмәтлегегеҙҙе лә нығытып, бар ғаилә менән күтәренке кәйефтә йәшәгегеҙ килһә, артабан уҡығыҙ һәм, әгәр оҡшаһа, минең кәңәштәрҙе тыңлағыҙ. Оҡшамаһа, фитоаптекаларға юлланығыҙ. Һәр хәлдә, шәхсән үҙем йылдар буйына ҡулланған ысул, файҙалы кәңәштәрем менән бүлешергә теләйем (фекерҙәрем менән килешмәүселәрҙе лә ихлас тыңлаясаҡмын!)

**Тәүҙә иң ябай һәм һәр кемгә файҙалы үлән сәйе ҡушылмаһынан башлайыҡ һүҙҙе. Был үләндәр Башҡортостаныбыҙҙың һәр төбәгендә үҫә һәм был ҡушылмаларҙы хәтерҙә тиҙерәк ҡалһын өсөн "Бишут"сәйе тип атаным. Йәғни был ҡушылмаға биш төрлө үлән ҡушыла. Ул йөрәк эшмәкәрлеген көйләй, ҡан һәм лимфа юлдарын таҙарта, тимәк, баш мейеһе эшмәкәрлеген яҡшырта, иммунитетты нығыта.**

**Клевер сәскәһе.** Файҙаһы - йөрәк-ҡан тамыры системаһын көйләй, микроэлементтарға бай, хуш еҫле. Борсаҡ, фасоль кеүек "ҡуҙаҡлылар" төркөмөнә ҡарағас, клевер сәскәһендә лә аҡһым, азот, май кислоталары (ашҡаҙан эшмәкәрлегенә, быуын кимерсәктәренә файҙалы майҙар) күп. Иммунитетты нығыта.

**Ҡарағат япрағы.** Файҙаһы - хуш еҫле флавоноидтарға бай (ашҡаҙан-эҫәк эшмәкәрлеген көйләй, кәйефте күтәрә). Бигерәк тә иммунитетты көйләүсе, йөрәк эшмәкәрлеген яҡшыртыусы барыбыҙға ла билдәле, тик аш-һыу аша ғына организмға инеүсе С витамины күп. Ҡарағаттың ҡалын һәм ҡуйы йәшел төҫтәге япраҡтарының файҙаһы ҙур. Мөмкинлек булһа, баҡса ҡарағатынан бигерәк, ҡырҙа, йылға ярҙарында, уйһылыҡтарҙа үҫкән ҡарағаттың япраҡтарын йыйығыҙ.

**Ҡурай еләге япрағы һәм емештәре.** Файҙаһы - ҡан тамырҙарын таҙарта, ҡуйы ҡан бер аҙ шыйыҡлана, тукыма араларындағы артыҡ шыйыҡсаны сығара, артерия баҫымын көйләй. Йәй һәм көҙ осоронда бары тик ҡурай еләгенең япраҡтарын ҡулланырға, ә ҡыш һәм яҙ айҙарында емешле суҡтарын сәйгә ҡушыу отошло.

**Ер еләге япрағы һәм емешле суҡтары.** Файҙаһы - микроэлементтарға бай. Бигерәк тә йөрәк эшмәкәрлеге өсөн файҙалы пектин матдәһенең күп булыуы отошло. Япраҡ менән емешле суҡтарҙы ҡурай еләге япрағы кеүек ҡулланырға кәңәш итер инем.

ҠАТЫН-ҚЫҘ ҠОЛАҒЫНА

**Ҡатын-ҡыҙ ни тиклем шат - ул шул тиклем тормошто нығыраҡ ярата, шул тиклем матурыраҡ күренә. Һәр йәшәгән көндән ҡәнәғәтлек алыу йөҙҙө йәшәртә, сафландыра. XIV быуатта Нефертити батшабикә составында сүпрә, һыу һәм зәйтүн майы булған битлек менән файҙалана. Бит өсөн сүпрә битлеге йәшәреү курсы үткәреү маҡсатынан эшләнә. Уны бер тапҡыр эшләгәндән һуң да һөҙөмтә күрергә мөмкин, әммә һәр көн эшләһәң, тағы ла яҡшыраҡ.**

# СҮПРӘЛЕ БИТЛЕК

2 балғалаҡ тере сүпрә (ҡоро, киптерелгән түгел), 6 балғалаҡ йылы һөт, 1 балғалаҡ бал, 3 балғалаҡ крахмал һәм бер нисә тамсы майлы Е, А витаминдары кәрәк буласаҡ. Һөҙөмтә булһын өсөн мотлаҡ тере сүпрә кәрәк, ҡоро сүпрә менән эшләгәндә маска үҙенең мөғжизәһен юғалта. Хатта А, Е витаминдарын ҡушмағанда ла битлек шәп эшләй. Шулай итеп, 2 балғалаҡ тере сүпрәгә йылы һөт ҡушып, 20 минут тотабыҙ. 8 балғалаҡ шыйыҡлыҡты алып, уға 1 бал ҡалағы бал өҫтәйбеҙ. Әгәр балға йәки башҡа бал ҡорто продукцияһына аллергия булһа, уны бер семтем көрпә ҡушылған 1 балғалаҡ йогурт менән алмаштырырға мөмкин. Ҡатнашмаға 3 балғалаҡ крахмал һалып, барыһын бергә яҡшылап болғайбыҙ. Ҡатнашма ҡуйыртылған һөт кеүек булырға тейеш. Уға А һәм Е витаминдарын ҡушабыҙ. Шулай уҡ тире төрөнә ҡарап, башҡа ингредиенттар өҫтәргә мөмкин. Ҡоро тире өсөн 2 балғалаҡ аҡ май, ҡатнаш тирегә - 2 бал ҡалағы яңы ғына һығылған кишер һуты, майлы тирегә - 2 бал ҡалағы яңы ғына һығылған картуф һуты. Ҡылҡәләм менән ҡатнашманы, күҙ, ауыҙ тирәләрен ҡалдырып, биткә һөртәбеҙ. Бер ҡат кипкәс, тағы ла ҡабатлайбыҙ. Шулай уҡ муйын һәм декольтены ла иғтибарҙан ситтә ҡалдырмайбыҙ. Эшләгән маска бер тапҡыр һөртөргә етергә тейеш.

Битлекте 20 минут тотабыҙ һәм йылы һыу менән йыуабыҙ. Сүпрәле йәшәреү курсы һәр көн эшләнгән 15 процедураны тәшкил итә.

Битлектең актив компоненттары: сүпрә - аминокислоталарға бай, улар тирене һығылмалы һәм шыма итә, һырҙарҙы тигеҙләй, күҙәнәктәрҙән токсиндарҙы сығара, үле күҙәнәктәрҙе ала. Бал тирене таҙарта һәм тире ҡатламындағы ҡан әйләнешен яҡшырта. А һәм Е витаминдары коллаген эшкәртелеүен көсәйтә, тиренең нескәреүенән һаҡлай, ялҡынһыныуҙарҙы бөтөрә.

Үҙеңде хәстәрләгәндә үҙеңде яҡшарыҡ баһалай, ярата, ихтирам итә башлайһың. Һөҙөмтәлә йөҙөң дә үҙгәрә, эштәреңдә яйлана.

✓ ***Был ҡатнашманы һәр кем ниндәй генә сире булыуға ҡарамаҫтан, ҡурҡмайынса көн һайын эсә ала. Дөрөҫөрәге, шулай эсһә, иммун системаһы нығына һәм организм һауығыу өсөн көс туплай башлай.***



**Боланут** (русса "Иван-чай" исеме менән билдәле) япрағы һәм сәскәләре. Был үләндә ҡушыу мотлаҡ шарт түгел. Әгәр киптерелгән үлән булһа, ҡушығыҙ. Был үлән сәйгә үҙенсәлекле хуш еҫ өҫтәй. Файҙаһы - тонусты күтәрә, бар организмға еңеллек бирә, баш мейеһе эшмәкәрлеген көйләй, хәтерҙе яҡшырта. Был үлән булмаһа, барыбыҙға ла билдәле **мәтрүшкә үләнен** (сәскәһен) ҡулланырға була. Шәхсән үҙем ошо үләндең еҫен бик яратып бармайым, шуға бик һирәк ҡулланам.

*Иҫкәрмә. Мәтрүшкә тигәс, һары мәтрүш (зверобой продырявленный) үләнен көндәлек эсер сәйгә ҡушып ҡуймағыҙ! Был үлән - дауа үләне! Уларҙың файҙаһы ла, артыҡ ҡулланғанда зыяны ла бар, тимәк.*

Бар кешегә лә килешкән, бер ниндәй кире тәьсире булмаған Бишут ҡушылмаһы өсөн бына ошо үләндәр етә. Йә, кемегеҙ белмәй ҙә, кемегеҙ өсөн был үләндәрҙе йыйып киптереү ҙур ҡыйынлыҡ тыуҙыра? Болануттан башҡаһы күптәрҙең йорто янында ғына йәки баҡсаһында, бик булмаһа, күршеләрҙең баҡсаһында үҫә. Еләктең баҡсала үҫкәне лә файҙалы. Әммә ҡыр еләге япраҡтарын йыя алһағыҙ, бигерәк яҡшы. Әйткәндәй, бер серем дә бар.

**Минең кәңәш:** Күптәр ҡыр еләген йыйып алып ҡайтҡас, эреләрен ваҡтарынан айыра һәм ваҡтарын, бешмәгәндәрен ташлай. Әгәр мин өйрәткән сәйҙе эсеп, ҡышты сирләмәй генә үткәрергә уйлаһағыҙ, ана шул ваҡ, сей йәки иҙелгән еләктәрҙе (кәрәкмәгән япраҡ, үләндәрҙән аралап) йыйып киптерергә генә кәрәк. Йәнә лә, юғары сортлы еләк ҡайнатмаһы әҙерләргә яратыусылар ҡыр еләгенең төпһәһен алып таҙарта (хәҙерге йәштәр өсөн ят булһа ла, беҙ йәш саҡта гел шулай таҙарта торғайныҡ). Үлән сәйе яратыусылар өсөн таҙартыуҙан ҡалған еләк төпһәләре - оло байлыҡ! Үҙегеҙҙең еләк йыйырға ваҡытығыҙ булмаһа, бары тик күршетирә, дуҫ-иштәрегеҙгә алдан әйтеп ҡуйығыҙ, еләк төпһәләрен ташламай һеҙгә бирһендәр. Шул ғына.

Еләк япрағы тураһында нимәгә оҙаҡ яҙам. Сөнки күптәр еләктең файҙалы һәм сәйгә тәм биреүен белә, әммә еләк япрағы шул тиклем йоҡа һәм бәләкәй, ә инде киптергәс, ҙтә мурт була. Берике әйләндерһең, он кеүек ыуалып бөтә. Шул сәбәптән генә күп кеше еләк япрағын йыйып тормай. Ә был япраҡ (төпһәһенең дә файҙаһы шул уҡ, ә инде еләкле суҡтарҙың файҙаһы икеләтә артыҡ) бирҙән, күп, икенсенән, файҙалы.

**Бишут ҡатнашмаһын әҙерләү.** Иң мөһиме - был файҙалы үләндәрҙе дөрөҫ нисбәттә ҡушып, сәй өсөн әҙерләп алыу! Иң тәүҙә ҡоро эмаллəнгән ҙур табаҡ алығыҙ. Мотлаҡ ҡоро булһын. Бер тамсы ғына һыу эләкһә лә үләндәрегеҙҙең тиҙ арала боҙолоуы ихтимал. Һеҙ бер юлы бер айға етерлек ҡатнашма әҙерләйһегеҙ. Ҡулығыҙҙы яҡшылап йыуып, ҡоротоғоҙ. Шунан сиратлап табаҡҡа кипкән үләндәрҙе һала башлайбыҙ.

**Беренсе ҡат.** Һәр үләндән берәр ус алып табаҡҡа һалығыҙ. Әгәр әле ҡаты һалҡындар етмәгән икән, ҡарағаттың япрағын ғына һалығыҙ. Сөнки ҡарағат емештәре бик көслө. Уларын витаминдар аҙайған осор - ҡыш һәм яҙ ҡулланырһығыҙ. Аҙаҡ ике ҡуллап үләндәрҙе еңелсә генә күтәргеләп, ҡатнаштырығыҙ.

**Икенсе ҡат.** Клевер, ер еләге, боланут үләндәренән тағы берәр ус өҫтәгеҙ. Тағы ла бер тапҡыр күтәрә биреп болғатып алығыҙ. Әгәр ҙә был ҡатнашма аҙ һымаҡ тойолһа, шул уҡ тәртиптә яңынан ҡабатлағыҙ йәки клевер сәскәһе менән боланут япраҡтарын тағы ла берәр ус өҫтәгеҙ.

Сама менән ниндәй дәүмәлдә ҡушыла был ҡатнашмаға үләндәр? Клевер, боланут, ер еләге - 2 өлөш. Ҡарағат, ҡурай еләге япраҡтары - 1 өлөш. Ни өсөн шулаймы? Сөнки ҡарағат япрағы күп булһа, сәйҙең төҫө ҡарая, ә ҡурай еләге күп булһа, күберәк тирләтә һәм файҙалы матдәләр тиҙ юғала, тимәк. Ә клевер сәйгә бал төмен бирә (Юҡҡа ғына йәйгеһен бал ҡорто ошо сәскәнең янынан китешмәй). Боланут (йә мәтрүшкә) хуш еҫ, еләк япрағы әскелтем тәм бирә.

Үләндәрҙе ҡушып бөткәс, барыһын да полиэтилен ҡапсыҡҡа һалып ҡуйырға ла, бер аҙнаға етерлеген генә сәй өҫтәле яныңа, тимер йә фарфор (полиэтилен һауыт ярамай, еҫе боҙола) һауытҡа һалып алып ҡалырға. (Был сәй бөткәс кенә моҡсайҙағы сәйҙән һауытҡа яңынан һалырһығыҙ). Шулай иткәндә сәйҙең хуш еҫе юғалмай.

Йәнә бер сер - бәләкәй һауытҡа һалыр алдынан шул миҡдарҙағы сәйҙе ныҡ ҡына итеп уста ыуып ваҡлап алырға була. Шулай иткәндә һауытҡа күберәк һыя йәнә сәй тиҙерәк бешә. Ә ҙур ҡапсыҡтағы сәйҙе бик ваҡларға ярамай.

**Сәйҙе дөрөҫ бешереү мотлаҡ.** Сәйнүктең эсенә эҫе һыу ҡойоп, бер минуттай ҡапҡасын ябып тоторға. Аҙаҡ был һыуҙы түгеп, сәйнүккә тәүҙә ҡәҙимге ҡара (йәки йәшел) бөртөклө сәй (бер эсеүгә етерлек итеп, мәҫәлән бер балғалаҡ) һалырға ла "Бишут" үлән сәйенән ике семтем (ҡара сәй күләменән 3 тапҡырға күберәк) төшөрөргә һәм өҫтөнә, сәйнүктең ҡыйығынан итеп ҡайнар (ҡайнап сыҡҡас 3-5 минут үткәс тағы ла яҡшыраҡ) һыу ҡойорға. Сәйнүк өҫтөнә таҫтамал ҡапларға. 5 минут самаһы ваҡыт үткәс, сәйнүккә тағы ла эҫе һыу өҫтәргә. Болғатырға кәрәкмәй. Үлән сәйе япраҡтары тәүҙә өҫтә була, аҙаҡ аҫҡа төшә башлай. Тимәк, сәй әҙер, эсә башларға мөмкин.

Үлән сәйен бер үк сәйнүктән көнөнә 3 тапҡыр эсергә мөмкин. Быныңөсөн әле өйрәнгәнсә яһалған сәйҙе, үләне генә ҡалғанса яһап бөтөрөргә (йәки ҡалған сәй һыуын икенсе һауытҡа ҡойоп торорға). Иң мөһиме, сәйнүктә һыу күп ҡалмаһын. Сөнки был һыу һыуынасаҡ һәм сәйҙең тәмен боҙасаҡ. Өс тапҡыр бешергәс, мотлаҡ сәйнүкте таҙартырға кәрәк. Был ысул ҡулланғанда сәйнүктең уртаса ҙурлыҡтағыһы отошло. Сөнки сәй япраҡтары бүртеп, сәйнүк эсе тиҙ генә тулып китә.

"Бишут" сәйен эскәндәй булдыҡ шикелле. Был ҡатнашманы һәр кем ниндәй генә сире булыуға ҡарамаҫтан, ҡурҡмайынса көн һайын эсә ала. Дөрөҫөрәге, шулай эсһә, иммун системаһы нығына һәм организм һауығыу өсөн көс туплай башлай. Быныһын үҙем һәм ғаиләм миҫалынан беләм. Тәжрибә өсөн бер йылда был ҡатнашма сәйен беребеҙ ҙә эсмәнек. Ҡыш буйына ниндәй генә киҙеүме, һалыуымы булмаһын, һәр беребеҙ икешәр, өсәр тапҡыр сирләп алдыҡ. Икенсе йылы барыбыҙ ҙа был сәйҙе яңынан эсә башланыҡ һәм сирҙәр кәмене йәки еңелерәк үтә башланы. Хәҙер улым үлән һалынмаған сәйҙе эсеүҙән бөтөнләй баш тарта башланы. Ҡайһы берҙә, һиҙер микән тип, ҡәҙимге ҡара сәйҙе генә бешереп ҡуйһам, эсеп ҡарай ҙа, "үләне юҡ бит" тип, үҙе эҙләп табып, үлән ҡушып ҡуя. Үҙе икенсе тапҡыр эскәндә үләндәрҙең хуш еҫе һаҡланһын өсөн сәйнүк төбөндә артыҡ һыу ҡалманымы икән тип күҙәтеп кенә йөрөй.

Ә үләндәрҙе йәй буйы ҡаланан 20-30 саҡрым алыҫлыҡтағы баҡсабыҙҙан, баҡса янындағы урман ситтәренән, йә районға ҡайтҡанда йыйып алам. Бер ҡышҡа етерлек кенә әҙерләйем. Оҙаҡ һаҡлаһаң, тәме юғала.

**Лилиә ҠӘЙЕПОВА.**

*СӘЛӘМӘТ БУЛ!*

# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Күнегеүҙе башлар алдынан ваҡытты билдәләгеҙ һәм 30 минуттан һуң туҡтағыҙ. Ошо арала бер ритмда 4 тапҡыр ныҡ итеп һауа һулағыҙ. Һулыш тәбиғи, танау япраҡтарында ғына тойолорлоҡ булырға тейеш. Уны ныҡ итеп эскә алмағыҙ һәм һуҙмағыҙ, ул сәпәкәй иткәндәге кеүек ҡыҫҡа булырға тейеш. Күнегеүҙе эшләп, үҙ-үҙенде иң ауыр тороштан да: ҡурылдай астмаһы, йөрәк, бауыр өйәнәктәренән ҡотолорға, юғары ҡан баҫымын, хатта юғары температураны төшөрөргә мөмкин. Бәлки, тулыһынса 100 процентҡа хәлегеҙ еңеләймәһә лә, уны бер ни тиклем яҡшыртырға була. Шуға күрә, был күнегеүҙе мотлаҡ өйрәнегеҙ һәм ауыр ваҡыттарҙа уны "тиҙ ярҙам" урынына ҡулланығыҙ.

Бигерәк тә ололар өсөн "Устар" күнегеүе яҡшы. Ул юғары ҡан баҫымын төшөрөргә ярҙам итә. Уны хатта "Ҡан баҫымын нормаға килтереү өсөн күнегеү" тип атарға ла мөмкин. Уны хәлегеҙ ныҡ ауыр булғанда ла эшләргә онотмағыҙ - ул теләһә ниндәй сир ваҡытында беренсе ярҙам. Күп осраҡта пациенттар дарыу эсергә теләмәйенсә, көн дауамында, 2-3 сәғәт һайын ошо күнегеүҙе эшләй һәм кискә уларҙың ҡан баҫымы нормалләшә. "Ялҡытҡыс! - тиерһегеҙ, - дарыу эсеүе еңелерәк..." Һәр кем үҙе нимә теләй - шуны һайлай.

Тағы шул хаҡта ла уйлағыҙ. Юғары ҡан баҫымын бер тапҡыр ғына төшөрөргә кәрәкмәй бит, уның тотороҡло булыуы, "һикермәүе" мөһим. Сөнки тап ошо "һикереү" инсультҡа килтерә лә инде. Стрельникова гимнастикаһын эшләп, ҡан тамырҙарын нығыта алаһығыҙ.

Ололар өсөн икенсе күнегеү урология комплексынан һәм "Пружина" тип атала. Тын алыу, йөрәк-ҡан тамырҙары ситемаһы, ашҡаҙан-эсәк трактына ыңғай йоғонто яһауҙан тыш, ул бәүел-енес системаһын нығыта, ҡатын-ҡыҙға һәм ир-егеттәргә енси проблемаларҙы хәл итергә ярҙам итә.

Янбаштарға ҡандың ҡапыл ағылыуы һөҙөмтәһендә аяҡтарҙағы тамырҙар ҙа нығый. Был ауырлыҡ менән йөрөгән кешеләр өсөн бигерәк тә мөһим.

Әммә "Пружина" күнегеүен эшләй башлағанға тиклем бер аҙна көн һайын көнөнә өс тапҡыр (йышыраҡ та мөмкин, әгәр үҙегеҙҙе насар тойһағыҙ, 2-3 сәғәт һайын) 30-ар минут "Устар" күнегеүен эшләргә кәрәк.

Һуңынан икенсе күнегеүгә күсергә лә мөмкин.

## "Пружина"

Ҡаты ултырғысҡа йәки табуреткаға ултырығыҙ, аяҡтар ҡулбаш киңлегенән тарыраҡ арауыҡта урынлаша. Һынығыҙҙы тура тотоғоҙ, арҡағыҙ көсөргәнештән арынһын, еңел һәм иркен улытырығыҙ. Ҡулығыҙҙы терһәктән бөгөгөҙ һәм устарығыҙҙы асып, алға ҡуйығыҙ (экстресенс торошо).

Танауығыҙ менән шаулы, ҡыҫҡа, ритмик тын алғанда устарығыҙҙы йоҙороҡлағыҙ һәм бер үк ваҡытта тура эсәгегеҙҙе эскә тартығыҙ, ҡыҫығыҙ. Был ваҡытта тән аҫҡа "йыйыла" - "пружина" һығыла. Янбаштар тын алғанда кинәт һәм анус менән бергә көсөргәнеш кисерә. Артабан ҡапыл көсөрнештән арынығыҙ - тын сыҡты, пружина бушаны.

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**

*ШУНДАЙ ХӘЛДӘР...*

# ЙЫҺАЗ ДА, ХОҠУҠ ТА ЮҠ

**Көн һайын уҡ булмаһа ла, мәктәптәрҙә, бигерәк тә физкультура дәрестәрендә балаларҙың вафат булыуы тураһындағы мәғлүмәттәр йышайҙы. Бында төп сәбәптәрҙең береһе итеп йөрәк өйәнәгеләр.**

